✓ *Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Мартта 2013 йылдың икенсе яртыһына тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән гәзитебеҙгә яҙылырға була. 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йыллыҡҡа яҙылыу хаҡы - 360 һум 24 тин. Ошо айҙа гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән тәүге 10 кеше Ноғман Мусиндың "Алдар батыр" тигән китабына лайыҡ буласаҡ. Кем алыҡ?*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 МАРТ (БУРАНАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№10 (531)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Бала ҡайғыһы йөрәктә,**



ир ҡайғыһы итәктә

3

**Бөтә бөйөк эштәр ҙә...**

балалар өсөн эшләнә



5

**Күксәй ниңә иланы,**



8-9 йәки Ниңә көсһөҙ зат көслө булырға тейеш?

**Яҙмыш әсеһен...**

күтәрешеүселәр осрап торҙо



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡатын-ҡыҙҙың нисек кейенеүе һеҙҙең өсөн мөһимме?

*Азамат МӘҺӘҘИЕВ, БДУ студенты:* Кешенең үҙ кейеменә иғтибары, нисек кейенеп йөрөүе бик мөһим, тип уйлайым, сөнки кейем үҙенең эйәһе хаҡында ярайһы ғына аныҡ мәғлүмәттәр биреп тора. Кейеменә ҡарап ҡаршылайҙар, аҡылына ҡарап оҙаталар, тигән ҡараш та бар. Шуға ла кеше хаҡында күберәк белгең килһә, әлбиттә, уның кейеменә лә күҙ һалмай булмайҙыр. Юғиһә бит, кемдәрҙер һуҡыр рәүештә модаға эйәреп маташа, ә кемдер әллә ни модалы булмаһа ла үҙенә килешеп торған ғәҙәти кейемендә лә модалы күренә ала. Бында күп нәмә ҡатын-ҡыҙҙың зауыҡ һәм тәрбиә кимәленә бәйлелер. Уйлап ҡараһаң, бынан бер утыҙ-ҡырҡ йыл элек кенә бит әле (әсәйем минең йәштә саҡта) салбар кейеү ғәҙәткә нимәгән була, ә хәҙер салбар киймәгән ҡатын-ҡыҙ бик һирәк. Ә шулай ҙа мода артынан ҡыуыусылар ҡәҙимге кейемдең дә бер "нескә" урынын табып ала: ҡыҙҙарҙың күбеһе хәҙер биле түбән салбар кейә. Был айырыуса көҙ һәм ҡыш яраған эш түгел, сөнки буласаҡ әсәләр йәш саҡта шулай яланғас бил йөрөп, һалҡын тейҙерәләр. Мин уйлауымса, ҡатын-ҡыҙ кейеме, ғөмүмән, бик асыҡ булырға тейеш түгел. Был әҙәп һаҡлауҙан да, сәләмәтлек өсөн дә кәрәктер. Әлбиттә, йәш саҡта һәр кемдең модалы кейенгеһе килә, ләкин мода менән модалы кейенеү араһындағы айырманы күрә лә белергә кәрәк, сөнки һәр модалы кейемдең дә кемдәргәләр килешеп етмәүе бар бит әле. Быны аңламаған ҡатын-ҡыҙҙың ҡайһы саҡ унайһыҙ һәм хатта көлкө хәлгә тарыуы ла бик ихтимал. Әҙәпле, ыҫпай, кәүҙәһенә, төҫ-башына килешле кейем кешене, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙы, биҙәй генә. Әйткәндәй, ҡыҙҙар шуны ла иҫтә торорға тейеш: бер үк кейемдә төрлө урындарҙа булыу, йомшаҡ итеп әйткәндә, аҡылһыҙлыҡ бәләһе тип ҡаралыуы бар. Мәҫәлән, тубығы йыртыҡ, тишек-тошоҡ джинсыла театрға, ҡунаҡҡа йәки университетҡа дәрескә килеүҙе мин бер ҙә яраған ҡылыҡ тип иҫәпләй алмайым. Үҙебеҙҙең мөхиткә килгәндә, миңә БДУ талибәләренең урын-ерен, самаһын белеп кейенеүҙәре оҡшай. Мосолман кейемендәге ҡыҙҙар йыш осрай, был һәйбәт күренеш, әлбиттә. Ләкин уларҙа ла "модаға эйәреү" тигән нәмә өҫтөнлөк итмәйме икән, тип ҡуям ҡай саҡ, сөнки яулыҡлы ҡыҙҙарҙың да үҙ-ара русса һөйләшеүен ишетеп аптырағаным бар. Икенсенән, мосолман кейеменең дә бит төрлө стиле, заманса модаһы бар, уға ла күҙ һалып алыу яҙыҡ булмаҫтыр ҡыҙҙарға, юғиһә, бигерәк бер төрлө фасон, ҡара-һоро көңгөрт төҫтәр күҙҙәрҙе ҡыуандырмай.

(Дауамы 2-се биттә).

# БАЙРАМ МЕНӘН, ГҮЗӘЛ ЗАТТАР!



*Хәҡиҡәткә тоғролоҡло,*
*Намыҫлы хаҡ инәйҙәр.*
*Яуызлыҡҡа ҡалҡан улар,*
*Иманға һаҡ инәйҙәр.*
*Һис ҡасан да кешеләргә*
*Насарлыҡ теләмәйҙәр.*
*Һуғыштарҙы күрәлмәйҙәр,*
*Хаслыҡты өнәмәйҙәр.*
*Ирҙә тоғролоғон һаҡлар*
*Ғүмергә таҡ инәйҙәр.*
*Фанилыҡтан - бәҡыйлыҡҡа*
*Суғына Саҡ инәйҙәр.*
*Тик шәфҡәтлек күҙҙәрендә*
*Аҡтан-аҡ, пак инәйҙәр.*
*Милләтебеҙ ҡото булып*
*Йәшәһен ағинәйҙәр!*

Ағинәйҙәр ҡоро тураһында 6-7-се биттәрҙә уҡығыҙ.

*✓ Йәй көндәре урамда, транспортта оялышыңдан күҙеңде ҡайҙа төбәргә белмәйһең: яланғас түштәр, асыҡ кендек (етмәһә, ошонда ҡара, тигән һымаҡ, кендектәренә һырға ла тағып алалар бит!), ояла белмәгән бот-бурбайҙар...*

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЭШТӘН ҠУРҠМАҺАҢ...



**Йән-яғымды күҙәтеп, машиналарҙың күплегенә иҫем китеп, яй ғына ҡала урамы буйлап киләм. Уйға батып килә торғас, светофорҙың ҡыҙыл утына сығып киткәнмен, имеш. Ҡапыл эргәмдә ишетелгән машина тауышынан тертләп киттем. Иғтибарһыҙлығым өсөн әрләнеремде көтөп, башымды күтәреп ҡараһам, өр-яңы, әлегә номеры ла булмаған сит ил машинаһың руле артында ултырыусы кеше киң йылмайып, һаулашып уҙып китте. Мине кем менәндер бутаны, күрәһең, тип уйлай-уйлай, артабан атланым. Автотуҡталыш янына килеп етеүемә, баяғы машина минең эргәгә килеп туҡтаны һәм унан бер ир-егет сығып, минең янға килде. Таный алмаған кешем, баҡтиһәң, үҙемдең уҡыусым булған икән. Затлы һәм зауыҡлы кейемен күҙҙән үткәреп, уның ябай шофер ғына түгеллеген төҫмөрләргә була ине. Артабанғы һөйләшеү быны дәлилләне генә. Үҙ тырышлығы һәм булдыҡлығы менән матди уңышҡа өлгәшеүсе уҡыусымдың тәжрибәһе тураһында һөйләргә булдым гәзит уҡыусыларға ла.**

- Эшһеҙлек осоро башланғас, Мәскәү, Себер тарафтарында эшләп ҡараным, ләкин бик тиҙ был юл менән ғаиләмде аҫырай алмауымды аңланым, - тип һөйләп китте Фәрүәз. - Шулай уҡ үҫеп буй еткереп килгән улдарыма һәм ҡыҙыма ла атай тәрбиәһе кәрәк ине, шуға ла тәүәккәлләп, кире тыуған яҡтарыма ҡайттым һәм йән аҫырар шөғөл тураһында уйлай башланым. Өйөм эргәһендә генә күл, ялан булыуын иҫәпкә алып, ҡаҙ һәм һарыҡ үрсетергә ҡарар иттем. Банктан 50 мең һум кредит алып, эш башлап ебәрҙем. Көҙгөһөн ҡаҙҙарҙы Себер тарафтарына алып барып һаттым. Сәфәрем уңышлы булды, ҡулыма мул ғына аҡса инде. Улай ғына ла түгел, иткә һәм мамыҡ мендәрҙәргә бик күп заказдар йыйып алып ҡайттым. Юлымдың уңышлы булыуы мине тағы ла дәртләндереп ебәрҙе һәм икенсе йылға ҡаҙҙарҙың һанын тағы ла арттырҙым. Ҡаҙағстандан ҡуй һарыҡтары ла алып ҡайттым, ләкин уларҙы аҫырау мәшәҡәте әҙ булһа ла, әллә ни килем килтермәнеләр, шуға ла ул һарыҡтарҙы бөтөрөп, үҙебеҙҙең ябай һарыҡтарҙы үрсетергә ҡарар иттем. Ошо һәүетемсә, үҙебеҙсә алып барылған эшмәкәрлектән килгән килемгә ҡаланан өс бүлмәле фатир һатып алдыҡ, балаларҙы уҡыттыҡ, машиналы булдыҡ. Ауылдағы ир-егеттәрҙе лә Себер сығып китеп, тегендә һуғылып, бында һуғылып йөрөмәҫкә, үҙенең ҡулы белгән эште тоторға ла башларға кәрәк тип өгөтләйем, ләкин күптәрҙә тәүәккәллек юҡ һәм шул эшкә аяҡ сала ла ҡуя.

Эштән ҡурҡмаһаң, уңышҡа ла өлгәшергә була, килем дә килә. Был эшмәкәрлеккә тотоноуым, берҙән, ғаиләмде тағы ла берҙәмерәк итте, икенсенән, балаларҙы замана һынауҙарынан ҡурҡмаҫҡа, эштән өркмәҫкә, эшҡыуарлыҡ, кәсепселек төшөнсәләрен аңларға булышлыҡ итте. Заманға һылтанмай, ғаиләң менән бер булып, тырышып эшләү үҙе оло бәхет ул, - тип һүҙен тамамланы киләсәккә ышаныслы бағыусы уҡыусым.

Уҡытыусы кеше уҡыусыһының уңыштарына үҙ балаһының бәхетенә һөйөнгәндәй ҡыуана. Әлеге уҡыусым хаҡында ла: "Тормош көтөү буйынса юғары баһаға лайыҡ уҡыусым", - тип уйлап ҡуйҙым.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡатын-ҡыҙҙың нисек кейенеүе һеҙҙең өсөн мөһимме?

(Башы 1-се биттә).

***Фәтхулла ИШБАЕВ, пенсионер:*** Был мәсьәләгә төрлө быуын кешеләренең мөнәсәбәте төрлөсәләр, тип уйлайым. Шул уҡ ваҡытта уларҙың ниндәй зауыҡ һәм ниндәй әхлаҡи ҡараш эйәләре булыуы ла күренер ине яуаптарында. Дөйөм кешелек ҡиммәттәренән сығып фекер йөрөткәндә, шулай ҙа, ярым-яланғас ҡатын-ҡыҙҙың ҡылығы бер генә халыҡҡа ла, ир-егеттәргә түгел, хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙҙәренең дә күбеһенә оҡшайҙыр, тип раҫлай алмаҫ инем барыбер, сөнки был, ысынлап та, әхлаҡһыҙлыҡ һәм дә бәйелһеҙлектең сиге. Йәй көндәре урамда, транспортта оялышыңдан күҙеңде ҡайҙа төбәргә белмәйһең: яланғас түштәр, асыҡ кендек (етмәһә, ошонда ҡара, тигән һымаҡ, кендектәренә һырға ла тағып алалар бит!), ояла белмәгән бот-бурбайҙар... Кемгә нисектер, ләкин мин бындай ҡиәфәттәге ҡатын-ҡыҙға нәфрәттән башҡа бер ни ҙә тоймайым. Ҡарт кешенең фәлсәфәһе, тип әйтәсәктәрен белеп торам, ләкин миңә әле ни бары 60 ҡына, үҙемде ҡайһы бер булыр-булмаҫ егет ишараттарынан да йәшерәк хис итәм, донъяға ҡарашым да заманса, сөнки, аңлағанһығыҙҙыр инде - мин яңы быуын "ҡартласы". Ә шулай ҙа миңә барыбер әҙәпле кейенгән ҡатын-ҡыҙ оҡшай. Был, тимәк, бөтәһе лә оҙон итәк-еңле, ябыҡ иҙеүле кейем кейһен, тигәнде аңлатмай, әлбиттә. Ләкин зауыҡлы, юғары мәҙәниәтле ҡатын-ҡыҙ бер ваҡытта ла эсен-түшен, балтырҙарын ялтыратып йөрөүгә үҙенә ирек ҡуймаясаҡ, иманым камил. Асыҡтан-асыҡ интим кейенеүсе (дөрөҫөрәге, кейенмәгән) ҡатын-ҡыҙ күрәләтә ир-егет күҙенә салыныу, уның иғтибарын йәлеп итеү, уны шуның менән булһа ла үҙенә арбау маҡсатын ҡуя. Икенсе төрлө әйткәндә, ярым-яланғас ҡатын-ҡыҙ бер ниндәй романтикаһыҙ, фәҡәт енси яҡтан борсоулы уй-ниәткә генә һәләтле йән эйәһелер, тигән уйҙамын.

***Моратҙым АЙСЫУАҠОВ, журналист:*** Ҡатын-ҡыҙ һәр саҡ милләт әсәһен, усаҡ һаҡлаусыны символлаштырға, әхлаҡ, әҙәп идеалы булған һәм үрҙә әйтелгән сифаттарға торошло кейенгән.

Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙың матур, зауыҡлы кейенеүе мөһим. Шул уҡ ваҡытта, "матур" һүҙе аҫтында өҫтөнә мөмкин тиклем әҙерәк сепрәк йәбештереүҙе лә аңларға ярамай. Психологтар һәм медицина хеҙмәткәрҙәре билдәләүенсә, был ҡатын-ҡыҙҙарҙың ғына түгел, ир-егеттәрҙең дә түлһеҙлегенә сәбәпсе була. Етмәһә, ҡатын-ҡыҙ яланғаслығы көсләү, педофилия кеүек енәйәттәргә һәм хыянаттарға килтерә. Кеше, бигерәк тә гүзәл заттар, ни тиклем асыҡ кейенә, шул тиклем әйләнә-тирәләгеләрҙең хайуан ихтыяжын уятыуға нығыраҡ булышлыҡ итә. Үҙенә ҡарата хөрмәт түгел, теләк уята. Шудай булғас, бында әхлаҡ, әҙәп идеалы булыу хаҡында һүҙ ҙә бармай. Шулай уҡ ир-егеттәр кеүек кейенеү ҙә килешмәй. Минең уйлауымса, ҡатын-ҡыҙҙың кейеме уның нәфислеге менән бергә тыйнаҡлығын да күрһәтергә тейеш.



**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...

# ...ЙӘМӘҒӘТСЕЛЕК ЭШЕНӘ



**Баймаҡ үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры Луиза Дәүләтшинаның төп эшенән тыш башҡарған йәмәғәтселек вазифаларын һанап бөтөрөрлөк түгел. Ул - районлдың ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе, Баймаҡ район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы, "Башҡортостан ҡыҙы" журналының мөхәрририәте ағзаһы, районлдың "Ағинәйҙәр" ҡоро ағзаһы, крайҙы өйрәнеүселәр ҡоро ағзаһы һ.б. Ғөмүмән, тынғыһыҙ йәнле Луиза Ҡаһарман ҡыҙы бер ваҡытта ла тик ултырмай, райондағы һәр сараның уртаһында йөрөй, ойоштора. Үҙенә лә, башҡаларға ла тынғылыҡ бирмәүсе зат ул. "Бының өсөн һеҙгә аҡса түләмәйҙәр, йәмәғәтселек эшендә ҡатнашыу һеҙгә нимә бирә? Хәҙерге күпселек кеше карьера, аҡса тип йәшәгән прагматик заманда йәмәғәтселек эше менән булышыу ситен түгелме?" тип тә һорағаныбыҙ бар унан. Беҙгә ул түбәндәгесә яуап бирә:**

- Донъяла бар нәмә лә аҡса менән үлсәнмәй. Йәмәғәтселек эше ана шундай эштәрҙән һанала. Миңеңсә, аҡса менән үлсәнмәгән байлыҡ хаҡын билдәләп булмай торған иң ҙур ҡиммәт ул. Кешенең йылы мөнәсәбәтен, изге ниәттәрен, мөхәббәтте аҡсаға һатып алып булмай. Һинең кемгәлер күрһәткән изгелегең үҙеңә, балаларыңа, туғандарыңа изгелек булып әйләнеп ҡайта. Ғөмүмән, йәмәғәтселек кимәлендә башҡарылған эштәрҙең барыһы ла кешеләр, тирә-яҡ, милләт, ил өсөн тәғәйенләнгән. Мин йәмәғәтселек эшендә ҡатнашып йөрөп, шуны аңланым: әгәр ҙә һин кешеләр яҙмышы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәһәң, бындай яуаплылыҡ башҡа кешеләргә лә күсә һәм улар үҙҙәре өсөн генә түгел, һинең кеүек үк, башҡалар өсөн дә яуаплы була башлай. Был ниндәйҙер иҫәпкә ҡоролмаған йәмәғәтселек эшенең бик үҙенсәлекле эстафета формаһы. Әгәр ҙә бер кеше башҡалар өсөн яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәһә, был тойғо тиҙ арала таралып, домино принцибы буйынса барлыҡ халыҡты яулап ала. Ябайлаштырып әйткәндә, бер кешенең тоҡаныуы, йылылығы күңелдән-күңелгә таралып, һөҙөмтәлә ҙур һәм яҡты бер ҡояшты хасил итә. Бер кеше бәхетле булһа, йылмайһа, икенсе кешене лә йылмайта һәм бәхетле итә ала. Яҡшынан - яҡшы, матурҙан - матур, яҡшылыҡтан - яҡшылыҡ, матур-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Республикаһының Фән һәм техника өлкәһендә дәүләт премиялары буйынса комиссия 2013 йылдың 1 мартынан 31 майына тиклем БР фән һәм техника өлкәһендә Дәүләт премияларына дәғүә итеүгә эштәр ҡабул итә башланы. Премияға дәғүә итеүгә эштәрҙе ғилми учреждениелар, юғары уҡыу йорттары, дәүләт органдары, урындағы үҙидара органдары, милек формаһына ҡарамай, предприятиелар һәм ойошмалар тәҡдим итә ала. Барлыҡ документтар Өфө ҡалаһы, Туҡай урамы, 46 адресы буйынса БР Президенты Хакимиәтендә 328-се бүлмәлә ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 280-80-93.

✓Алдан иҫәпләүҙәр буйынса, Башҡортостанда бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең уртаса эш хаҡы, инфляция кимәлен иҫәпкә алғанда, 2018 йылға, 2012 йыл кимәле менән сағыштырғанда, 38774 мең һумға тиклем, йәғни ике тапҡырға тиерлек артырға тейеш. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2012 йылдың 1 июленән бюджет өлкәһенең дәүләт һәм муниципаль учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 14 процентҡа арттырылды. Бынан тыш, бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыуға Рәсәй Президентының 597-се Указы йүнәлтелгән, ул Башҡортостанда бюджет өлкәһендә эшләгән 175 мең кешегә ҡағыла.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республикала йәшәүсе күп балалы әсәләргә "Әсәлек даны" миҙалдары тапшырҙы. Наградаларға биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән 56 ҡатын эйә булды. Республика башлығы билдәләүенсә, балалар йорттарынан, интернаттарҙан һәм махсус учреждениеларҙан тәрбиәгә бала алған ғаиләләргә республика бюджетынан 400 мең һум күләмендә әсәлек капиталы ала ине. Хәҙер инде инвалид баланы тәрбиәгә алған граждандар өсөн был сумма 500 мең һумға тиклем арттырыласаҡ.

✓2013 йылда Башҡортостанда инвалидтар өсөн 176 эш урыны булдырыу планлаштырыла. Бының өсөн субсидиялау механизмы ҡаралған. Бер урынға уртаса субсидия күләме 66,2 мең һумға тиклем арттырылған. Шул уҡ ваҡытта эш урынына квота бүлеү инвалидтарҙы эш менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итеүгә йүнәлтелгән төп сараларҙың береһе булып ҡала. 2012 йылда республикала планлаштырылған 9335 квотаның 6002-һе, йәғни 64 проценты үтәлгән.

***✓ Бала ҡайғыһының тап йөрәгендә булғаны өсөн дә һаҡланалыр донъяла әсәлек тойғоһо. Ошо тойғо кешелекте лә һаҡлап килә. Дөрөҫөрәге, бала ҡайғыһының йөрәктә булыуы кешелекте һаҡлай ҙа инде. Был - хәҡиҡәт.***

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# БАЛА ҠАЙҒЫҺЫ ЙӨРӘКТӘ,

## ир ҡайғыһы итәктә

**Был әйтемдең "Бала көйөгө йөрәктә, ир көйөгө итәктә", "Бала - бәгер ите", "Бала өсөн әсәнең йөрәге, атаның беләге һыҙлар", "Бала шатлығы - ана шатлығы" тигән төрлөсә юҫыҡта фекер йөрөтөргә йүнәлеш булырлыҡ варианттары ла бар. "Бала ҡайғыһы йөрәктә, ир ҡайғыһы итәктә" әйтеменә һалынған фекер "ике икең дүрт була", тигәндәй, еңел генә аңлашылған һымаҡ булып тойолһа ла, уның тәрәндәрәк ятҡан мәғәнәһе лә бар. Миҫалға ошо риүәйәтте генә алайыҡ.**

Ил ҡыҙырып йөрөүсе дәрүишкә өс юл сатында һылыуҙарҙан-һылыу бер ҡатын осраған. Ҡатындың күҙ-сырайындағы сәйер һыҙатҡа ла иғтибар иткән дәрүиш. Уның һын-һыпатындағы, йөҙ төҙөлөшөндәге камиллыҡ, илаһилыҡ йөрәгенә уйылған хәсрәтен һис тә йәшерә алмай икән. Юлдан саҡ ҡына ситтәрәк таш өҫтөндә ултырған ҡатындың балаларына ла иғтибар иткән дәрүиш. Уларҙың береһе - сәстәре бешкән арыш һаламылай һап-һары малай, икенсеһе - ыҫмалалай сөм-ҡара сәсле ҡыҙыҡай икән.

Дәрүиш уларҙың янына килгән дә, ауыҙын асып өндәшергә генә иткәндә, ҡатын уны бүлдереп, ҡайҙалыр билдәһеҙ яҡҡа, алыҫҡа эйәге менән ымлап:

-Нимә хаҡында белергә теләгәнегеҙҙе аңланым, зинһар өсөн, анау таш артына йәшеренеп ҡарап торһағыҙ, үҙегеҙ белергә теләгәнде һүҙһеҙ ҙә аңларһығыҙ, - тигән.

Дәрүиш таш артына йәшеренеүе булған, алыҫта саң туҙаны ҡалҡҡаны күренгән. Бер мәл аҡ дөлдөл егелгән матур биҙәкле ап-аҡ көймәгә ултырып, һары сәсле ҡупшы ғына кейенгән урта йәштәрҙәге ир килеп туҡтаған. Аты туҡтап та өлгөрмәҫтән, ир ҡатындың аяҡ аҫтына йығылған һәм аяғына баҫып ҡатынды үбергә тотонған. Үбеп танһығы ҡанғас, арыш сәсле малайҙы ла ҡулына алып, уны иркәләп, ҡатынға әле генә үҙе елдереп килгән юлға ымлап күрһәтеп, өсәүләп бергә шунан китергә өндәгән. Ҡатын үҙҙәренә ҡарап аптырашта ҡалған ҡыҙына ҡараш ташлаған да, ир күрһәткән юл буйлап бер ҡасан да китмәйәсәген, ҡыҙын яңғыҙ ҡалдырмаясағын аңлатып, баш һелккән. Ир кеше, нимәнелер аңлатырға, иҫбатларға теләгәндәй, ярһып-ярһып, ҡулдарын һелкә-һелкә һөйләп, малай менән әсәһе араһында йөрөргә тотонған. Әммә ҡатын ҡымшанмай ҙа баҫып тора биргән. Ахырҙа, ир кеше түҙмәй, барыһына ла ҡулын һелтәп, көймәһенә һикереп ултырған да, атына ҡамсы төшөрөп, әле генә килгән юлынан саптырып китеп тә барған.



Аҡ көймә күҙҙән юғалған юлдың саңы ла ултырып өлгөрмәй, икенсе юл буйлап ҡара юрға егелгән ҡара көймәнең елдереп килгәне күренгән. Көймәнән уның хужаһы - ҡара сәсле, тәүге ирҙән дә мыҡтыраҡ, баһадирыраҡ кәүҙәле ир төшкән. Был ир ҙә, тәүге ир кеүек, аты туҡтар-туҡтамаҫтан үк ҡатындың аяҡ аҫтына ташлана, шунан һуң аяғына баҫып, ҡара сәсле ҡыҙын ҡулына алып, уларҙың икеһен дә үбергә тонона. Был ир ҙә әле генә үҙе елдереп килгән юлға ымлап күрһәтеп, хәҙер үк уларҙы үҙе менән алып китәсәген белдерә. Ҡатын, "Юҡ, бармайым", тигәнде аңлатып, баш һелкә... Алыҫтан ҡарағанда өнһөҙ булып тойолған ваҡиғаларға шаһит булған дәрүиш шуны аңлай: ҡара сәсле, ҡара ҡашлы ир ҡатынға һәм ҡыҙына үҙенең ниәтен нисек кенә итеп аңлатмаһын, уларға хет ожмахтың үҙен вәғәҙә итһен һәм үҙе менән бергә китергә нисек кенә өндәмәһен, ҡатын уның менән бер ҡайҙа ла китмәйәсәк, ул әйҙәгән юлға ике аяғының береһен баҫмаясаҡ...

Дәрүиштең күңелен ҡатынды һәм уның балаларын йәлләү тойғоһо сорнап ала шул саҡ. Ҡара юрға елдереп киткән юлдың саңы ултырыуын да көтөп тормаҫтан, ул йәшеренеп торған еренән сығып, ҡатын янына барып, уны йыуатырға ниәт итеп, инде ҡуҙғалдым ғына тигәндә, киренән тағы ла таш артына боҫорға мәжбүр була. Ни өсөн тигәндә, ул бөтөнләй көтөлмәгән юлһыҙ яҡтан өсөнсө йәйәүле ирҙең яҡынлап килеүен күреп ҡала. Ирҙең кейеменә һәм һын-һыпатына ҡарап, уның үҙ хәләл көсө менән донъя көтөүсе намыҫлы кеше булыуын тойомлай дәрүиш. Ир теге өсәүгә яҡынлаған һайын, аҙымдары ла шәбәйә бара икән. Бына ул атлауҙан йүгереүгә күсеп, ҡатынды күтәреп алып үбә лә, уның ике балаһын ике яурынына ҡундырып, өсөнсө юл буйлап үҙенең бәхетле һәм яҡты киләсәгенә табан атлай. Уларҙың дүртеһенең дә шат йылмайған йөҙөндә ҡояш нуры сағыла...

"Бала ҡайғыһы йөрәктә, ир ҡайғыһы итәктә" әйтемен бар тулылығында аңлатыуҙың классик формаһына торош итәлер был риүәйәт. Ысынлап та, ниңә ҡатын үҙенә мохтажһыҙ ғына киләсәк тәьмин итерлек, яҡшы йәшәү шарттары тыуҙырырлыҡ ике ирҙең береһе менән дә китергә теләмәгән һуң? Сөнки ул ирҙәрҙең ҡайһыһы менән генә киткән осраҡта ла, яҡшы йәшәү шарттарына бер балаһын алмаштырырға тура киләсәген яҡшы аңлаған. Бына шуның өсөн дә уның сырайына болот ҡунған. Балаларының аталарының ҡайһыһы менән генә киткән осраҡта ла, хет ожмах шарттарында көн итеүенә ҡарамаҫтан, ҡатындың айырылып ҡалған балаһы өсөн йөрәге һыҙлаясаҡ һәм ул был ирҙәрҙең береһе менән дә бәхетле була алмаясаҡ. "Итәк ҡайғыһы" бер ваҡытта ла йөрәк һыҙлауынан өҫтөн була алмай. Сөнки донъяла тик әсәй кеше генә бөтә балаларына тигеҙ итеп ҡарай.

Бер мәл бер әсәнең балалары үҙ-ара бәхәсләшеп киткән. Йәнәһе, уларҙың ҡайһыһын әсәләре нығыраҡ ярата икән. Һәр ҡайһыһы иң ныҡ яратылған баланың үҙе икәнлеген иҫбатларға тырышҡан. Улар ахырҙа әсәләре янына килеп, уның үҙенән был хаҡта һорашҡан. Әсәләре майшәмде яндырған да:

-Бына был шәм - ул мин, ә уның уты - минең мөхәббәтем, - тигән.

Шунан ул йәнә бер майшәм алып, уны тоҡандарған да:

-Бына был минең тәүге балам, мин уға үҙемдең һөйөү утымды бирҙем, әммә миндәге уттың ялҡыны шул килеш ҡалды...

Әсә кеше нисә балаһы бар, шунсама шәмде тоҡандырып сыҡҡан да, үҙендәге шәмдең һис тә кәмемәүен, ҙур һәм йылы булыуын аңлатҡан. Бының менән, әлбиттә, ул бөтә балаларына бер үк миҡдарҙа һөйөү, наҙ биреүен әйтергә теләгән.

Бала ҡайғыһының тап йөрәгендә булғаны өсөн дә һаҡланалыр донъяла әсәлек тойғоһо. Ошо тойғо кешелекте лә һаҡлап килә. Дөрөҫөрәге, бала ҡайғыһының йөрәктә булыуы кешелекте һаҡлай ҙа инде. Был - хәҡиҡәт.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

лыҡтан матурлыҡ тыуа. Йәмғәтселек эшен мин кешеләр араһында ышаныс тойғоһо тыуҙырыу, кешеләрҙең ышанысын яулау институты тип тә атар инем.

Үҫмер саҡта һәр ҡайһыбыҙ киләсәккә маҡсаттарыбыҙҙы билдәләп, көндәлек алып барабыҙ бит инде. Мин шунда, нишләптер, Борис Пастернактың "Әгәр ҙә бер кеше һинең хаҡта йылы һүҙ әйтһә, шуның өсөн яуаплылыҡ тояһың" тигән һүҙҙәрен яҙып ҡуйғанмын. Ысынлап та, берәү һине маҡтап һөйләй икән, һин уның маҡтағанынан артығыраҡ итеп эшләргә тырышаһың бит.

Әсәй, өләсәй, ҡартәсәй булған өсөн дә аҡса түләмәйҙәр. Әммә бының өсөн балалар һиңә йылмайыу, уңышлы һәм бәхетле кеше булыуы менән түләй. Бына Германияла бер ҡыҙыҡ йола бар икән. Унда ата-әсә балаһының тыуғандан алып, үҫеп етеп, һөнәр алып, кеше булып киткәнсегә тиклемге барлыҡ сығымдарын яҙып бара икән. Иң ҡыҙығы шунда: бала үҙаллы йәшәй һәм эшләй башлағас, был сығымдарҙы ата-әсәһенә ҡайтарырға бурыслы. Ошо бурысты ҡайтарыу-ҡайтармау был илдә кешенең ҙур уңышҡа өлгәшеү күрһәткесе булып һанала һәм был мәғлүмәт резюмеларға, анкеталарға индерелә икән. Беҙҙең күҙлектән был йола ситен булып тойолһа ла, йәш кешегә үҙ алдына ҙур маҡсат ҡуйып, шуға өлгәшеү өсөн ҙур стимул булып торғанын аңлауы ауыр түгел. Сөнки ата-әсәһенә был бурысын түләмәүсе кеше йәмғәтселек алдында булдыҡһыҙ булып күренәсәк һәм был күрһәткес уның киләсәкке карьераһында сағылыш табасаҡ.

Беҙҙең илебеҙ күп йәһәттән энтузиазм менән йәшәй. Ниндәйҙер иҫәпкә ҡоролмаған мөнәсәбәттә генә кешенең ысын йөҙө, асылы сағылыш таба. Бына шуның өсөн дә мине үҙенә йәлеп итәлер инде йәмғәтселек эше.

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Айчи медицина университеты (Япония, Токио ҡалаһы) профессоры Казуо Умезава менән эш осрашыуы үткәрҙе. Осрашыуҙа Республика клиник онкология диспансеры менән Казуо Умезаваның дарыуҙар эшләү өлкәһендәге лабораторияһының хеҙмәттәшлек итеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓Башҡортостанда Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы сиктәрендә иң яҡшы муниципаль берәмеккә конкурс иғлан ителде. Халыҡтың экологик мәҙәниәтен күтәреү, территорияларҙы төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү, шулай уҡ муниципалитеттарҙы тирә-яҡ мөхитте һаҡлау һәм тәбиғәттән рациональ файҙаланыу мәсьәләләренә йәлеп итеү конкурстың төп маҡсаты булып тора. Бәйгене ойоштороусылар булып БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы, "БР Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы сығыш яһай. Ғаризалар 2013 йылдың 20 ноябренә тиклем ҡабул ителә.

✓Өфөлә рәсми рәүештә теркәлгән 7300 эшһеҙ иҫәпләнә, уларҙың 6250-һе эшһеҙлек буйынса пособие ала. Өфөнөң Халыҡты эш менән тәьмин итеү үҙәгендә йәмғеһе 7700-гә яҡын кеше иҫәптә тора. Ҡаланың вакансиялар банкында бөгөнгө көндә 16 меңгә яҡын буш эш урыны иҫәпләнә. 2013 йыл башынан Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге үҙәге ярҙамында 1700-ҙән ашыу кеше эшкә урынлашҡан. Йәнә 500 эшһеҙ хеҙмәт баҙарында талап ителгән һөнәрҙәргә ҡайтанан бушлай уҡытырға ебәрелгән.

✓Мәскәүҙә, Башҡортостан Республикаһының РФ Президенты янындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллегенең конференц-залында, башҡорт тарихсыһы Булат Аҙнабаевтың "Федератив мөнәсәбәттәрҙең тарихи нигеҙе: Рәсәй һәм Башҡортостан" темаһына лекцияһы үтте. Сара Башҡортостан яҡташтар берлегенең "Дискурс" исемле яңы проекты сиктәрендә Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы менән ойошторолдо. Ассоциация башлығы Азат Бәҙрәнов һөйләүенсә, "Дискурс" проекты сиктәрендә Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары өсөн Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең эксперттар берләшмәһе вәкилдәре менән осрашыуҙар үткәреү планлаштырыла.

**"Башинформ"дан.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҮҘКИЛЕМ КӘМЕҺӘ ЛӘ...

**Өфө ҡала округына былтыр 19 миллиард 99 миллион һум килем инһә, сығымдарҙы финанслау күрһәткесе 20 миллиард 579 миллион һум булған. Сығымдарҙың төп өлөшөн мәғариф (37 процент), һаулыҡ һаҡлау (8 процент), торлаҡ-коммуналь хужалыҡ (20 процент) тармаҡтары алып тора. Был һандар менән сираттағы матбуғат конференцияһында ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Насретдинов таныштырҙы.**

Былтырғы менән сағыштырғанда, үҙкилем 11 процентҡа кәмеп, 1 миллиард 193 миллион һум тәшкил иткән. Был инде республика һәм ҡала округы араһында сығым вәкәләттәрен бүлеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән үҙгәрештәргә бәйле аңлатыла. Сөнки бюджеттың килем өлөшөнөң 40 процентын физик шәхестәрҙең килеменә һалым тәшкил итә (15 проценты - ерҙәрҙе ҡуртымға биреүҙән, 11 проценты - активтарҙы һатыуҙан ингән аҡса, 10 проценты - иҫәпләнгән килемгә берҙәм һалым түләүҙән килгән килем). Ә ҡала округы бюджетына физик шәхестәр норматив буйынса 30 процент түгел, 20 процент ҡына түләй. Был, үҙ сиратында, 1 миллиард 175 миллион һум аҡса бюджетҡа инмәй, тигән һүҙ. Быны һаулыҡ һаҡлау тармағын республика үҙенең ҡарамағына алыуға ла бәйле. 2011 йылдан 1 миллиард 900 һум аҡса шул сәбәпле ҡала бюджетын "урап үтә". Шулай уҡ былтырҙан башлап полицияны финанс яҡтан тәьмин итеү тулыһынса федераль бюджет иҫәбенә башҡарылыу сәбәпле, транспорт сараларын теркәү өсөн дәүләт пошлинаһы һәм юл хәрәкәтен боҙған өсөн административ штрафтар ҡала округы бюджетына иҫәпләнмәй. Дәүләт пошлинаһы буйынса юғалтыуҙар ғына ла 276 миллион һум тәшкил итһә, административ штрафтар буйынса - 105 миллион һум.

Шуға күрә бөгөн бюджет формалаштырыуҙағы төп проблема тип һалым һәм һалым булмаған үҙкилемдең түбән булыуын билдәләргә кәрәк. Был йәһәттән, халыҡ иҫәбе миллиондан ашҡан ҡалалар араһында үҙкилем күләме буйынса Өфө иң һуңғыларҙың береһе иҫәбендә. Мәҫәлән, Новосибирскиҙың үҙкилеме 22 миллиард һум тәшкил итһә, Дондағы Ростовта һәм Пермдә был күрһәткес - 15-әр, Ҡаҙанда - 12,6, Красноярскиҙа - 12,3, Өфөлә 9,4 миллиард һум. Бындай артта ҡалыуҙың сәбәбе - һалымдарҙы иҫәпләүҙең түбән нормативы. Мәҫәлән, бюджеттың 40 процентын формалаштырған физик шәхестәрҙең килеменә һалым Пермдә - 45, Новосибирскиҙа, Һамарҙа - 40, Дондағы Ростовта, Красноярскиҙа - 30, Ҡаҙанда 23,4 процент тәшкил итә. 2013-2015 йылдарға планда ҡаралған бюджетта был һан Өфөлә 22 процент буласаҡ. Шулай уҡ башҡа ҡалаларҙың бюджетында транспорт һалымынан ингән килем дә бар. Красноярскиҙа, мәҫәлән, ойошмаларҙың килеменә норматив буйынса 10 процент һалым ҡаралған һ.б.

Әйткәндәй, юрғаныңа ҡарап аяғыңды һуҙ, тиһәләр ҙә, үҙкилемдән тыш, баш ҡала бюджетына шулай уҡ юғарыраҡ торған бюджеттарҙан 9 миллиард 905 миллион һум аҡса ингән. Дөйөм килем күләменән 4 миллиард 827 миллион һум аҡса субсидиялар түләүгә йүнәлтелгән. 4 миллиард 886 миллион һум күләмендәге субвенция төп белем биреү программаларын тормошҡа ашырыуға; медицина ярҙамы күрһәтеүгә; балаларҙың ялын һәм уларҙың сәләмәтлеген нығытыуҙы ойоштороуға; тәрбиәгә алынған ғаиләләрҙә балаларҙы ҡарауға; етем балаларға социаль ярҙам күрһәтеүгә; етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеүгә йүнәлтелгән.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*АФАРИН!*

# ИҢ ЯҠШЫЛАР...

## еңеүсе ителде



**Был аҙнала Өфөлә "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2013" һәм "Башҡортостандың баш ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2013" бәйгеләре еңеүселәре билдәләнде. Был саралар Өфө ҡалаһының белем биреү системаһына 90 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән байрам тантанаһына тура килде. Унда шулай уҡ "Йыл директоры", "Иң яҡшы белем биреү учреждениеһы" һөнәри конкурстарына ла йомғаҡ яһалды.**

Баш ҡаланың дөйөм белем биреү системаһының тарихы бик бай. XIX быуат аҙағы - XX быуат башында Аксаков, Мария гимназиялары, "Ғосмания", "Ғәлиә" мәҙрәсәләре башлаған эште бөгөн 414 дөйөм белем биреү учреждениеһы, 244 балалар баҡсаһы, 134 мәктәп, гимназия, лицей, шулай уҡ 36 өҫтәмә белем биреү усағы дауам итә. Уларҙа барыһы 140 мең бала тәрбиәләнә һәм белем ала. Сараны асыу тантанаһында ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов бындай бәйгеләрҙең уҡытыусыларҙың һөнәри оҫталығын арттырырға мөмкинлек биреүен һәм ҡаланың киләсәге тап ошондай уҡытыусылар белем биргән уҡыусыларҙың ҡулында булыуын белдерҙе.

Быйыл "Баш ҡаланың йыл уҡытыусыһы" конкурсында 46 педагог ҡатнашҡан. Киров районы 5-се лицейының башланғыс кластар уҡытыусыһы Ольга Русинова абсолют еңеүсе исеменә лайыҡ булды, уға бүләккә автомобиль тапшырылды. Дим районының 74-се балалар баҡсаһы - "Иң яҡшы белем биреү учреждениеһы", Совет районы "Глобус" балалар ижады үҙәге директоры Ольга Ивашкова "Йыл директоры - 2013" бәйгеһе еңеүсеһе тип табылды. Йола буйынса, конкурс сиктәрендә тағы ике һөнәри оҫталыҡ конкурсына йомғаҡ яһалды. "Педагог-мастер" һәм "Педагог-тикшеренеүсе" исемен йөрөтөүсе уҡытыусылар һаны быйыл тағы 20 һәм 19 уҡытыусыға артты.

"Баш ҡаланың башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2013" конкурсы еңеүсеһе - Фәриҙә Миһранова Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында эшләй. 15 уҡытыусы араһынан тап ул иң яҡшыһы исеменә лайыҡ булды.

- Туған тел уҡытыусыһы телде һаҡлаусы булып тора, ә тел - ул халыҡ күңеленең ҡыңғырауы. Ошо ҡыңғырау сыңлауы мәңге тынмаһын - минең өсөн еңеүгә ҡарағанда ошоноһо мөһим, - ти Фәриҙә Ҡазыхан ҡыҙы. - Хәҙер инде 17 йыл эш тәжрибәм булһа ла, был бәйге минең өсөн әһәмиәтле булды. Коллегаларыңдың эше, методик асыштары менән танышыу, икенсе быуын белем биреү стандарттарына ярашлы ойошторолған дәрестәр ҡарау уҡытыусыны тағы ла үҫтерә, тип уйлайым.

Финалға барыһы биш уҡытыусы сыҡты. 64 лицейҙан - Алиса Хәмиҙуллина, 152-се мәктәптән - Эльмира Бикташева, 3-сө гимназиянан - Фәнзилә Нафиҡова, 42-се мәктәптән Асия Тләүсина теле, иле, халҡы киләсәге уларҙың һөнәренә лә бәйле икәнен яҡшы аңлаған рухлы уҡытыусылар. Хәҙер инде конкурстың республика этабы көтөлә. Ул 26 - 30 мартта Стәрлетамаҡ ҡалаһында үтәсәк.

*ХОККЕЙ*

# ЕҢЕҮГӘ ТАБАН...

## тағы бер аҙым

**Континенталь хоккей лигаһы плей-офф уйындарының көсөргәнешлеге көндән-көн арта бара. Көнсығыш һәм көнбайыш конференцияларында һигеҙәр команда араһында ярым финалда уйнаясаҡ дүртәр команда билдәләнде. Улар араһында "Салауат Юлаев"тың булыуы айырыуса ҡыуаныслы.**



Юлаевсылар Магнитогорскиҙың "Металлург" командаһы менән 7 осрашыу үткәрҙе һәм серияла 4:3 иҫәбе менән еңеү яуланы. Һуңғы, хәл иткес уйынды, юлаевсылар бик һаҡ башланы һәм тәүге осорҙа күберәген үҙ ҡапҡаһын һаҡлауға өҫтөнлөк бирҙе. Ләкин хоккей - һөжүм итеүҙе яратҡан уйын, һәм быны уйынсылар ҙа, тренерҙар ҙа яҡшы аңлай. Шуға күрә, юлаевсыларҙың икенсе осорҙа әүҙемлектәрен арттырыуы һәм, һөҙөмтәлә, уңышҡа өлгәшеүе көтөлмәгән хәл булманы. Никита Филатовтың голы "Салауат Юлаев"ты алға сығарҙы, ә өсөнсө осор аҙағында Алексей Кайгородовтың хужаларҙың буш ҡапҡаһына сәпәгән шайбаһы ҡунаҡтарға ышаныслы еңеү килтерҙе. Уйын иҫәбе 0:2.

**Артабанғы уйындарын "Салауат Юлаев" Ҡаҙандың "Аҡ барс" командаһы менән үткәрә. Яратҡан командабыҙҙың ярым финал уйындарында ла еңеү яулауына ышанабыҙ һәм уңыштар теләйбеҙ.**

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Утыҙ яңы машина район дауаханаларына юл алды. Улар реанимацион ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Машиналар үҙәк район дауаханаларына тапшырыласаҡ. Тимәк, төпкөл ауылдарҙа ла реанимация автомобилдәре буласаҡ. Шулай уҡ ошо арала "Сәләмәтлек үҙәге", "Ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге" күсмә медицина модулдәре һәм балалар өсөн диагностика комплекстары һатып алынасаҡ. Йәмғеһе 18 күсмә модуль һәм 53 ашығыс медицина ярҙамы машинаһы һатып алыу планлаштырыла.

✓Өфөлә уллыҡҡа алыусыларҙы уҡытыу буйынса әүҙем эшмәкәрлек алып барыла. Махсус курс программаһында семинарҙар, лекциялар, тренингтар үткәреү ҡаралған. Уллыҡҡа алыусылар менән педагог-психологтар, социаль педагогтар, юристар эшләй. Һәр кандидат өсөн психологик диагностика үткәрелә, уның һөҙөмтәләре буйынса граждандың үҙ ғаиләһенә бала алыуға әҙерлек кимәле билдәләнә. Программаны үҙләштергәндән һуң, уллыҡҡа алыусыларға әҙерлек курсы үтеү тураһында танытмалар тапшырыла.

✓Республикала 138 йәш кешегә дәүләт ярҙамы буйынса премиялар тапшырылды. 60 мең һум күләмендәге премияға - 29 кеше, 30 мең һум күләмендәге премияға 109 кеше эйә булды. "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проекты сиктәрендә премиялар йыл һайын 14-25 йәштәрҙәге һәләтле ҡыҙ һәм егеттәргә тапшырыла. Быйыл ул һигеҙенсе тапҡыр тапшырылды. БР Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2006 йылдан алып Башҡортостанда йәшәүсе 889 кеше премия лауреаты булған.

✓Республикала 2012 йылда бөтә төр финанслау сығанаҡтары иҫәбенә тәбиғәтте һаҡлау сараларына инвестицияларҙың дөйөм күләме 1,848 миллиард һум тәшкил итте. Республика бюджетынан тәбиғәтте һаҡлау сараларына 2012 йылда - 534 миллион һум, федераль бюджеттан 59 миллион һум аҡса бүленгән. Йәнә 69,6 миллион һум муниципаль бюджеттарҙан йүнәлтелгән.

✓"Алтынай" башҡорт балалар театр-студияһы 18 мартта Башҡорт ҡурсаҡ театрына спектаклдәр ҡарарға саҡыра. Сәғәт 11-ҙә - "Йомро икмәк", сәғәт 13-тә - "Тәгәрәп китте йомғағым". Ролдәрҙе 4 йәштән алып 14 йәшкәсә балалар уйнай. Белешмә өсөн телефондар: 8-927-302-66-50, 8-917-443-25-32.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Баш ҡалабыҙ Өфөлә VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары тамамланды. Спорт һарайында үткән йомғаҡлау кисәһендә Халыҡ-ара балалар уйындары комитеты президенты Торстен Раш, Балалар уйындарының генераль сәркәтибе Ричард Смит, Башҡортостан Республикаһының Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Александр Иванюта, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм башҡалар ҡатнашты.**

# БӨТӘ БӨЙӨК ЭШТӘР ҘӘ...

## балалар өсөн эшләнә



Балалар уйындарын ябыу тантанаһы йыр-моң тамашаһы, "Мираҫ" бейеү ансамбле сығышы менән аралашып барҙы. Ниміәһе ҡыуаныслы: сарала рус һәм инглиз телдәре менән бер рәттән башҡорт теле лә әүҙем яңғыратылды, башҡа йырҙар һәм бейеүҙәр араһында милли моңбейеүҙәребеҙ ҙә урын алды. Халыҡара балалар уйындары комитеты президенты Торстен Раш сараны ойоштороусыларға, ҡатнашыусыларға, спортсыларға, уларҙың ата-әсәләренә һәм ҡунаҡсыл Өфө халҡына рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе.

Рәсәй спортсылары Уйындарҙа бөтәһе 60 миҙал яуланы. Шуларҙың 22-һе - алтын, 20-һе - көмөш һәм 18-е бронза миҙалдар. Өфө командаһы ла бүтән командалар менән сағыштырғанда иң күп мәрәй йыйғандар рәтендә булды. Беҙҙең спортсылар иҫәбендә 16 миҙал: 6 - алтын, 5 - көмөш һәм 5 бронза. Әйткәндәй, Рәсәй исеменән сығыш яһаған Өфөнөң йәш юлаевсылары Уйындар тарихында рекорд ҡуйҙы: Швейцарияның Делемон ҡалаһы хоккейсылары менән матчта дәғүәселәре ҡапҡаһына 30 гол индерҙе!

Алдағы йылдарҙа уҙғарылған ошондай уҡ сара ҡатнашыусылары менән сағыштырғанда, был сарала ике тапҡырға күберәк командалар килеүен дә билдәләргә кәрәк. Ойоштороу кимәленә Торстен Раш әфәнде лә юғары баһа бирҙе: "Был уйындар балалар уйындары тарихында иң матуры булды!" - тигән фекере менән уртаҡлашты ул йомғаҡлау кисәһендә... Сара бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Кемгә генә барып төртөлмә - һәр кем рәхмәт һәм һоҡланыу һүҙҙәрен әйтеп ҡалырға ашҡынды. Түбәндә төрлө әңгәмәселәребеҙҙән ишеткән, үҙебеҙ иң ҡыҙыҡлы тип тапҡан бер-нисә фекер килтерәбеҙ.

**Валерий ПЛЯШУЧНИК, Украинаның Харьков ҡалаһынан килгән хоккей командаһы тренеры:** Беҙҙең хоккей командаһының ике бөйөк хоккей дәүләте - Рәсәй һәм Канада командаларынан ғына ҡалып, өсөнсө урын яулауы өсөн ҡыуанып бөтә алмайым. Бындағы боҙ сифаты ла, беҙгә күрһәтелгән уңайлыҡтар ҙа -барыһы ла "Өфө-Арена"ны һәм Спорт һарайын ысын мәғәнәһендә хоккей ғибәҙәтханаһы тип атарға ерлек бирә. Беҙ үҙебеҙҙең ни тиклем артта ҡалғанлығыбыҙҙы аңланыҡ. Өфө командаһына килгәндә, уларҙың бөгөн еңеп сығыуын мин объектив һәм шулай булырға тейеш хәл тип ҡарайым, сөнки беләм: Өфө хоккейсылары бер ваҡытта ла көсһөҙҙәрҙән булманы. СССР һәм Рәсәй хоккейына нисә яҡшы хоккей оҫтаһы бирҙе был ҡала - ҡулдағы бармаҡтар ғына етмәйәсәк...

**Микелле ФАСИНОТТИ, Италияның Турин ҡалаһынан килгән делегация етәксеһе:** Һеҙҙең кисерештәрҙе аңлайым: хәтерегеҙҙәлер, 2006 йылда беҙҙә лә, йәғни Турин ҡалаһында, Ҡышҡы



олимпия уйындары уҙғайны. Ойоштороу кимәле иҫ киткес шәп, тип әйтә алам. Унан ары, шуныһы ла ҡиммәтле: һеҙгә бөтөн донъяның төрлө ҡалаларынан юғары вазифалы кешеләр - үҙҙәре артынан меңдәрҙе, миллиондарҙы эйәртә алырлыҡ шәхестәр килде, һеҙгә мөкиббән китеүен белдерҙе. Донъя, айырым дәүләттәр масштабында ҙур шәхес булып үҫешеп етә торған балалар ҙа һеҙҙең ил балаларын, халҡын күңеленә яҡынайтты. Былар барыһы ла, "күбәләк эффекты" теорияһынан сығып ҡарағанда, алдағы йөҙ йыллыҡта планетаны ҡотҡарыр көскә эйәләр, тип уйлайым. Ойоштороусыларҙың ярыш сәменән тыш, дуҫлыҡтың өҫтөнөрәк булыуын йыш телгә алыуы ла ошоно аңлап эш итеү күрһәткесе.

**Дэниел РИЧАРДС, АҠШ, Огайо шататы, Кливленд ҡалаһы:** Микелле әфәнде менән тулыһынса килешәм һәм тағы шуны ла өҫтәгем килә: минең ҡыҙым Хлоя ски-кросс буйынса бронза миҙал яуланы һәм бының менән үҙен бәхетле тойоуы тураһында әйтте. Минең ҡыҙым һымаҡ уҡ меңгә яҡын балаға, уларҙың ата-әсәләренә шатлыҡ бүләк иткән икән был сара, тимәк, ойоштороусылар үҙ алдарына ҡуйған маҡсаттарҙы тулыһынса үтәгән, тигән һүҙ. Бала бәхете өсөн эшләнмәйме ни ерҙә һәр бөйөк эш!

**Оскар ТОСАТТО, Швейцария, Лозанна ҡалаһы вице-мэры:** Өфөлә миңә барыһы ла ныҡ оҡшаны. Ә иң һоҡландырғаны - урындағы бер гимназия (М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы - **Ред.**) һәм уның уҡыусылары булғандыр шулай ҙа. Унда мин һеҙҙең ысын мәғәнәһендә көслө халыҡ икәнлегегеҙҙе күрҙем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары шаулап-гөрләп үтте. Килгән ҡунаҡтар баш ҡалабыҙ халҡының ихласлығын да, тәбиғәтебеҙҙең йылы ғына буранын да, көләкәс ҡояшын да күреп өлгөрҙө. Ҡала халҡының иң ҡыҙыҡһыныусандары, әүҙемдәре, сәләмәт тормош яҡлылары иһә ялын күңелле уҙғарыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырманы. Ә иң мөһиме - ошо дүрт көн дауамында үҙебеҙҙең балалар сит ил балалары менән рәхәтләнеп саф һауала уйнаны!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЕТЕМДӘРҘЕ ШАТЛАНДЫРЫУ -

## иң ҙур сауап булыр



**Башҡортостан Республикаһында етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү программаһы бер нисә йыл уңышлы эшләп килә. Законға ярашлы, дәүләт етем балаларҙы улар балалар йорттарынан һәм интернаттарҙан сыҡҡас та, торлаҡ менән тәьмин итергә тейеш. Әммә ҙур финанстар талап ителгәнгә күрә, был бер көндә генә хәл ителә торған мәсьәлә түгел.**

Ә шулай ҙа Башҡортостанда ошо йүнәлештә күп эштәр башҡарыла. Республиканың баш ҡалаһы Өфөлә, мәҫәлән, 2007 йылда - 7, 2008 йылда - 10, 2009 йылда - 58, 2012 йылда 14 үҫмер яңы фатир алды. Быйыл иһә, ата-әсә наҙынан мәхрүм үҫкән 87 балаға фатир асҡыстары тапшырылды. Фатирҙар Дим һәм Ленин райондарының яңы йорттарында урынлашҡан. Ҡала округы Советы рәйесе Евгений Семивеличенко әйтеүенсә, 2012 йылға сират ҡапланды. Ләкин бындай етди сара ла мәсьәләне тулыһынса хәл итмәй әле. Бөгөн Өфөлә тағы 183 ҡыҙ һәм егет торлаҡҡа сиратта тора. "Был эште киләһе йылдарҙа эҙмә-эҙлекле дауам итергә планлаштырабыҙ. Беҙҙең бурыс -финанс табыу", - тине ул. Фатирҙар социаль яллау шарттарында тапшырылды. Йәштәр биш йыл дауамында уларҙы һата, йә алыштыра алмай.

Силәбе дәүләт мәҙәниәт һәм сәнғәт академияһының Өфө филиалы студенты Лилиә Килдийәрова шатлығын йәшермәй. Биш йыл сиратта торғандан һуң, уның ғаиләһенең торлаҡ мәсьәләһе хәл ителгән. "Үҙ йортоң булыуы шатлыҡ менән бергә ҙур мәртәбә лә өҫтәй. Ул дүрт диуар артында йәшәү тигәнде генә аңлатмай, ә ғаилән менән матур итеп тормош ҡороп, тәрбиәле балалар үҫтереүҙе лә иңгә йөкмәтә. Бер нисә айҙан донъяға киләсәк балабыҙҙы үҙ өйөбөҙгә алып ҡайтыу шатлығын кисерергә яҙһын",- ти ул.

Яңы фатирҙарҙан асҡыс алған йәштәрҙең контингенты төрлө. Күптәре училище йә вуз тамамлаған, эшләп йөрөйҙәр, ғаилә ҡорорға өлгөрөүселәр ҙә бар. Йәштәргә көтөлмәгән бүләк тә әҙерләнгән. Өфө ҡала округы депутаттары был фатирҙарҙа ҡайһы бер уңайлыҡтар булдырыуҙы ла хәстәрләгән. Фатирҙар һыуытҡыс, көнкүреш техникаһы, башҡа төрлө йорт кәрәк-яраҡтары менән йыһазландырылған. Был эштә ҡаланың төрлө ойошмалары, эшҡыуарҙар, депутаттар әүҙем ҡатнашҡан.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



### Боғаҡ (зоб)

❖ Сама белеп кенә ҡара миләш ашарға.

❖ Юл япрағының аҡ епһәләрен үрегеҙ һәм 7 көн рәттән муйынығыҙға тағып йөрөгөҙ. Аҙаҡ яндырығыҙ. Йәй үткәнсе бер нисә мәртәбә эшләгеҙ.

### Күҙҙәр

❖ Күҙҙәрҙәге ҡыҙыллыҡты бөтөрөү өсөн йомолған күҙ ҡабаҡтарына һалҡын ҡыяр телемдәре йәки аҡ сәскә, бөтнөк, шалфей, йүкә сәскәһе төнәтмәһендә сылатылған мамыҡ ҡуйырға. Төнәтмә 1 стакан ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ алда һанап кителгән үләндәрҙең береһен һалып яһала.

❖ Күҙҙәрҙән йәш аҡһа, 1 ҡалаҡ зәңгәр сәскәне (василек) 500 мл ҡайнар һыуҙа 1 сәғәт төнәтеп һөҙөргә һәм күҙҙәргә компресс яһарға.

❖ Күҙҙәр йәшләнһә, көнөнә 2-3 мәртәбә тары ярмаһын ҡайнатҡан һыу менән йыуырға.

### Цистит

2 ҡалаҡ юл япрағы орлоғон йыуырға һәм 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 10 минут һыуытырға. Ас ҡарынға 1 ҡалаҡ эсергә.

### Тромбофлебит

Иртә-кис алма һеркәһе һөртөргә кәрәк, уны эсергә лә мөмкин. 1 стакан һыуға 2 балғалаҡ алма һеркәһе ҡушыла.

### Ҡайын һыуы

Яҙ етте, тиҙҙән ҡайын һыуына йөрөүҙәр башлана.

❖ Тиҙ һыуыҡ тейеп барһа, йүткертһә, температура булһа, ҡайын һыуын һөткә ҡушып эсергә. Ҡайын һыуы булмаһа, уның япраҡтарын ер еләге менән ҡушып, сәй итеп эсергә. Ашар алдынан көнөнә 3 мәртәбә 1-әр стакан ҡайын һыуын 2 аҙна эсһәң, шифаһы тейә.

❖ Ангина булһа, ҡайын һыуы менән тамаҡты сайҡатырға.

❖ Көн һайын 1 стакан ҡайын һыуы эсеү бөйөрҙәге ҡомдо ҡыуа, таштарын ваҡлай.

### Артрит

100 грамм андыҙ тамырын 1 литр һыуҙа 15 минут ҡайнатырға, һөҙөргә һәм йылы һыу өҫтәп, ҡул-аяҡтарҙың ауыртҡан быуындарына ванна яһарға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ - Ағинәйлек, аҡһаҡаллыҡ, күптәр аңлауынса, ҡартлыҡ билдәһе түгел, ә рухи дәрәжә, - тип башлап китте һүҙен Вәсилә апай Садиҡова. - Шулай ҙа ошо рухи дәрәжәгә еткәнгә тиклем кеше бай тормош тәжрибәһе лә тупларға тейеш.*

*ФЕКЕР ҠОРО*



**Боронғоларҙың бер аҡылы булыр был: кәңәш бирә йөрөгөҙ, кәңәш ала йөрөгөҙ. Ул йола бәҫһеҙләнә төшһә лә, шөкөр, ил-йорт эсендә кәңәш бирә йөрөр аҡһаҡалдарыбыҙ, ағинәйҙәребеҙ бөтмәгән, уларҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалыр иманлылар ҙа бихисап. Тап ошо йолабыҙҙы бар тулылығында, урынеренә еткереп терелтеү, уны йәшәйешебеҙҙең төп ҡанундарының береһенә әүерелдереү мөҙҙәте етте хәҙер. Ул йоланы атҡарыуҙың төп шарты - халҡыбыҙҙы иманға өндәү. Өндәүселәр - үҙҙәре иманлы йәшәү рәүеше өлгөһө булған ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар. Улар өлгөһө, улар тәжрибәһе аша йәштәребеҙ, балаларыбыҙ, урта быуын аңына, иманлылыҡ күп мәсьәләләрҙе үҙенән-үҙе хәл итә, тигәнде һеңдереү. Шуның өсөн дә һәр районда, һәр ауылда ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар хәрәкәтен тергеҙеү, уларҙың кәңәш ҡорон эшкә егеү Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ошо бурысты атҡарыуға ең һыҙғанған Ғаилә, әсәлек, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссияһының (рәйесе Гөлфиә Янбаева) эш планына төп пункт итеп индерелгән.**



# КӘҢӘШ БИРӘ ЙӨРӨГӨҘ,

## кәңәш ала йөрөгөҙ...







### Әбйәлил ағинәйҙәре һүҙе

Ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар хәрәкәтенең дә, шәжәрә байрамдарының да тәү ерлеге Баймаҡ районы икәнен һәр кем белә. Шул уҡ ваҡытта был башланғыстарҙың Әбйәлил районында күтәрмәләп алыныуын да беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Әбйәлилдә был хәрәкәттәрҙең башында торған айырым ағинәйҙәрҙең исеме бар республикаға билдәле. Улар - Һәйетҡол ауылында йәшәүсе сәсәниә Вәсилә Садиҡова һәм Үтәгән ауылынан сәсәниә Хәнифә Әбүбәкерова. Уларға төбәлде беҙҙең "Кемдәр улар ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар?" тигән һорауыбыҙ.

- Тәүҙә шуны асыҡлап китәйек: ағинәйлек, аҡһаҡаллыҡ, күптәр аңлауынса, ҡартлыҡ билдәһе түгел, ә рухи дәрәжә, - тип башлап китте һүҙен Вәсилә апай Садиҡова. - Шулай ҙа ошо рухи дәрәжәгә еткәнгә тиклем кеше бай тормош тәжрибәһе лә тупларға тейеш. Әҙәпле, тотанаҡлы, йәшенә лә, олоһона ла ихтирамлы, иғтибарлы, кеселекле һәм кешелекле, ороп-бәреп хәбәр һөйләп йөрөмәгән ҡатын-ҡыҙҙы, мәҫәлән, ағинәй дәрәжәһенә еткән, тип иҫәпләргә була. Шулай уҡ динебеҙгә лә ихтирамлы, иғтибарлы булырға тейеш ундай кеше. Иманһыҙ кеше бер ҡасан да ағинәй ҙә, аҡһаҡал да була алмай. Шулай уҡ ысын ағинәй бер ҡасан да "Мин - ағинәймен!" тип күкрәк һуғып, ҡысҡырып, тауыш күтәреп, нимәнелер тыйырға тырышып, кемгәлер үҙ кәңәшен көсләп тағып йөрөмәйәсәк.

- Бала саҡ хәтирәләренән сығып, үҙемдең инәй, апай, еңгәләрҙе ысын ағинәйҙәр булғандар, тип күҙ алдыма килтереп ултырам, - тип һүҙгә ҡушыла Хәнифә апай Әбүбәкерова. - Улар шул тиклем ҡупшы, бөхтә итеп кейенер, ҡолаҡтарын, муйындарын ҡаплаған ап-аҡ ситса яулыҡ ябыныр ине. Килешһеҙ кейенгән йәки өҫ-башы туҙып, һәпрәләнеп йөрөгән берәйһе күҙҙәренә салынһа, уларҙы йомшаҡ ҡына итеп әйтеп тәрбиәләрҙәр ине. Һөйләгән һүҙҙәре лә ипле, тыйнаҡ булды. Уларҙың әйткәненә бер кем ҡаршы һүҙ ҡатманы, кәңәштәренә ҡолаҡ һалды. Бер-береһенә хәл белешергә йөрөгәндә улар бер ҡасан да ғәйбәт һөйләп ултырманы. Ишек төбөнән үк ниндәй ҙә булһа мәҡәл йә әйтем әйтеп килеп инерҙәр ҙә, йәтешләп кенә урындыҡҡа менеп ултырып, һүҙҙәрен артабан дауам итерҙәр ине. Беҙ ағинәйҙең килеүен көтөп алып, уның аҡыллы һүҙҙәрен йотлоғоп тыңлай торғайныҡ. Ошо рәүешле улар балаларҙы тәрбиәләгән, уларға халыҡ аҡылын һеңдереп үҫтергән...

"Ауыл яҙмышын, халыҡ яҙмышын хәстәрләүҙә ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар ролен нисек баһалайһығыҙ?" тигән һорауыбыҙҙы ла төбәнек Әбйәлил ағинәйҙәренә.

- Ауыл яҙмышын хәл итеү ауыл һәм район хакимиәттәре кимәлендә башҡарылырға тейешле бик яуаплы эш. Ә ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар, тәү сиратта, халҡыбыҙҙың мәҙәниәтен, телен, йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлап ҡалыуҙа ҙур роль уйнарға, был йүнәлештә эшләүсе дәүләт структураларына оло ярҙамсы булырға тейеш. Әле күптән түгел генә ауылдарҙағы бар мәсьәләләр күмәкләп йыйылып, йыйылыштарҙа тикшерелә, хәл ителә ине. Етәкселәр ҙә иң тәүҙә халыҡтың, бигерәк тә оло йәштәгеләрҙең фекерен, кәңәшен тыңланы. Әле бына шундай кәңәш ҡорҙары юҡҡа сыҡты. Ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар хәрәкәте бына шундай матур йоланы аяҡҡа баҫтыра, ауыл халҡын берҙәмлеккә, файҙалы эштәргә саҡыра, етәкселерҙе лә үҙ һүҙенә ҡолаҡ һалырға мәжбүр итә ала, тип уйлайбыҙ, - тип бер тауыштан яуапланы Вәсилә менән Хәнифә апайҙар.

Беҙ, әлбиттә, республикабыҙҙағы "Айыҡ ауыл" конкурсына нигеҙ һалыусы ағинәйҙәрҙән "Был яуыз афәтте еңеүҙең берәй аныҡ ҡына ысулы бармы?" тип һорамай булдыра алманыҡ.

- Беҙҙең Һәйетҡол ауылында айыҡлыҡ өсөн көрәш бик күп йылдар бара, - тип һөйләп китте Вәсилә апай Садиҡова.- Бөгөн ауылда эсеүселәр юҡ дәрәжәһендә икән, был ана шул көрәш һөҙөмтәһе. Ләкин был көрәште алып барыусы ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар, һәр эскән кешегә ташланып, уның ауыҙын "бикләп" йөрөйҙәр икән, тип уйламағыҙ. Эскән кешене әрләп кенә был яман ғәҙәтенән ҡотолдороп булмай. Ҡысҡырыуҙан, аҡыл өйрәтеүҙән генә файҙа юҡ. Яман ғәҙәтле кешене нимә менәндер әүрәтергә, тауыш күтәрмәйенсә, ипле генә һөйләшеп аңлатырға кәрәк башта. Оҙаҡ йылдар буйы халыҡты эскелек һаҙлығына батырҙылар, диндән, имандан яҙҙырҙылар, йәмғиәтебеҙҙәге бөгөнгө әхлаҡи көрсөк ошоларҙың һөҙөмтәһе бит инде ул. Ә шулай ҙа ул еңелмәҫлек яуызлыҡ түгел. Тик эскелеккә ҡаршы ил, хөкүмәт кимәлендә көрәшеү фарыҙ. Хөкүмәт, исмаһам, бына шул беҙҙең һымаҡ ағинәйҙәр башлаған "Айыҡ ауыл" хәрәкә-

**✓ Күркәм сифатлы, йәшәйеше менән дә, эшләгән эштәре менән дә өлгө булыр оло быуын кешеләренән төҙөлөргә тейеш һәр ауылда аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ҡорҙары.**

8 март

тен хуплап, күтәреп алып, беҙҙең сараларға ярҙам итергә тейеш. Ләкин, күрәһегеҙ, был ярҙам әлегә һиҙелмәй. "Айыҡ ауыл" конкурсы ла күтәреп алынманы кеүек...

## Баймаҡтар өлгөһө баймаҡтарса булды

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты комиссияһының эш планына ярашлы, быйылғы ағинәйҙәр ҡороноң тәүгеһе Баймаҡ ҡалаһында үткәрелергә тейеш ине. Баймаҡ үҙәкләштерелгән китапханалар селтәре директоры, Баймаҡ башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы Луиза Ҡаһарман ҡыҙы Дәүләтшина был ҡорҙо район ауылдарында йыл әйләнәһенә үткәрелеп килгән "Хәтерләйбеҙ, баш эйәбеҙ" эстафетаһының йомғаҡлау сараһына тап килтерергә ниәтләүен белдерҙе. Ниәт хупланды. Ысынлап та, Баймаҡ ағинәйҙәре һәм аҡһаҡалдары Учалы, Белорет, Бөрйән, Ейәнсура, Әбйәлил, Хәйбулла, Йылайыр районлары, Сибай ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйестәре һәм ағинәйҙәре, аҡһаҡалдары ҡатнашҡан сарабыҙҙы бик ныҡ күтәрмәләне, өлгө күрһәтте, фәһем бирҙе, күп нәмәгә ишараланы, дәртләндерҙе, ең һыҙғандырҙы. Аҙаҡтан ейәнсураларҙың: "Ейәнсураға ғына ҡайтып етәйек әле..." тип, юл буйы ашҡынып ҡайттыҡ та, иртәгәһенә үк район ауылдары буйлап үҙ ағинәйҙәребеҙ һәм аҡһаҡалдарыбыҙҙы ойошторорға, Баймаҡта ишеткән-күргәндәребеҙҙе хәбәр итергә сығып киттек", - тип һөйләүе үк быны раҫлай.

Башта килгән ҡунаҡтар ҙа, Баймаҡ тамашасылары ла район мәҙәниәт йортонда ҡуйылған үҙенсәлекле күргәҙмәне тамаша ҡылды. Бына оло йәштәге апайҙар бергә йыйылып, бер күргәҙмә эргәһендә йәнле әңгәмә ҡорған. Уларҙың ни өсөн нәҡ ошо урынға йыйылыуы шунда уҡ аңлашылды. Сулпан Нәбиуллинаның ҡул эштәре, ҡорамалары, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының милли кейем өлгөләре ҡыҙыҡтырған икән уларҙы. Артабан ҡунаҡтар иғтибарын йәнәшәләге күргәҙмә хужабикәһе Софья Әсәнованың: "Быныһы инде-һигеҙ ожмах биҙәге. Ул һәр йортта булырға тейеш", - тигән һүҙҙәре үҙенә йәлеп итте. Был һүҙҙәрҙән һуң һәр кем ул теккән төрлө түшәк кәрәк-яраҡтарын, ҡорамаларҙы күҙҙән үткәрҙе, заказдарын бирергә ашыҡты. "Аллаға шөкөр, заказсылар бик күп. Айырыуса милли башҡорт кейеме тегеүҙе үтенгәндәр бихисап. Эшләп кенә өлгөр!" - тип, шатлығын белдерҙе Софья Хәмзә ҡыҙы. Шунның менән яратҡан шөғөлдөң ғаиләһе өсөн өҫтәмә килем сығанағы ла булып тороуына ишаралап ҡуйҙы.

Рифа Шаһиева, Зәлиә Ишморатова, Гөлфинә Һибәтуллина, Зәкиә Сөләймәнова һәм башҡаларҙың ҡул эштәре күргәҙмәһен ҡарағанда ла шул уҡ хәҡиҡәт раҫҡа сыҡты: был матурлыҡ Баймаҡ ерендәге бик күп ғаиләләрҙә урын ала бара. Ошо сарала ҡатнашҡан һәр ауыл вәкилдәре үҙ төбәгенә хас башҡорт милли кейемендә килгәйне, тимәк, милли кейем Баймаҡ халҡының ихтыяжына әйләнгән икәнен аңлауы ауыр түгел. Ихтыяж булғас, милли кейемдәр тегеү, ҡорама ҡороу, кейеҙ баҫыу, сигеү сигеү кеүек шөғөлдәр ҡатын-ҡыҙҙарға килем килтереү сығанағына әүерелергә тейеш.

Районда ошондай күргәҙмәләр, конкурстар ойоштороп, ҡатын-ҡыҙҙарҙы әүҙемләштереү буйынса бик күп эшләгән район ҡатын-ҡыҙҙары советы рәйесе Луиза Дәүләтшина шуға өлгәшергә ынтыла ла инде. Былтыр ул һәм ул етәкселек иткән китапханалар хеҙмәткәрҙәре районда "Милли кейемдә - быуаттар сағылышы" тигән конкурсты ла бик сағыу итеп үткәргәйне. Был юлы ла әлеге сара сиктәрендә башҡорт милли кейеме тегеүселәр, уларҙы моделләүселәр өсөн конкурс ойошторолдо, баһалама ағзалары уларҙы - Ләлә Ғәлимова, Гөлдәр Хисмәтуллина, Гөлфиә Рәхимова, Алина Байсарина, Зифа Кадаева, Мәхмүзә Исламғолова, Гөлдәр Хисмәтуллина, Анастасия Васильцова, Алина Байсарина, Раушания Закирова һәм башҡаларҙы төрлө номинацияларҙа билдәләп, матур бүләктәргә лайыҡ итте. Тағы ла бер шәп конкурс барыһының да иғтибарын йәлеп итте: башҡорт кейемендәге ҡурсаҡтар ҙа ярышты. Ниндәй генә әкиәт, легенда геройҙары юҡ ине бында! Айырыуса, "Ете ҡыҙ", "Таһир һәм Зөһрә" кеүек ҡурсаҡтар хайран ҡалдырҙы. Бындай уйынсыҡтар зауыҡлылығы менән генә түгел, ә тәрбиәүи яҡтан да оло әһәмиәткә эйә. Әлеге ҡурсаҡтарҙа ла халҡыбыҙҙың бай тарихы, күңелде үҫтереүсе әкиәт, риүәйәт, легендалары сағылыш тапҡан. Ярышта иһә ошондай матурлыҡты тыуҙырыусы Гөлнара Мостахетдинова, Зөлфиә Биктина, Гөлнур Ҡарамурзина, Гөлфиә Һибәтуллина еңеп сыҡты.

## Ағинәйҙәр тәрбиәләй

Ысынлап та, кем һуң ул аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр? Баймаҡ районы ағинәйҙәре ҡоро етәксеһе Хөрмә Мөхәмәт ҡыҙы Биктимерова һүҙен ошондай һорауҙы яңғыратыуҙан башланы. - Һәр ҡатын-ҡыҙ хаҡлы ялға сыҡҡас, үҙ-үҙен генә ҡәҙерләп, сериалдар ҡарап, бәйләм бәйләп, ҡунаҡтан-ҡунаҡҡа ғына йөрөгөһө киләлер. Әммә бөгөн оло быуын кешеләре алдында мөһим бурыс ҡаялай килеп баҫты: йәш быуынды тәрбиәләүгә ҡулдан килгәнсә ярҙам итеү, уларға тарихыбыҙ, туған телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, рухыбыҙ, асылыбыҙ тураһындағы хәҡиҡәтте түкмәй-сәсмәй тапшырыу.

Хөрмә Мөхәмәт ҡыҙы Баймаҡ ағинәйҙәренең йыл дауамында башҡарған эштәренә лә туҡталып үтте. Мәсеттәрҙә буласаҡ һалдаттарҙы фатиха биреп әрмегә оҙатҡандар, айыҡ туйҙар, сабыйҙарға исем ҡушыу, башҡа йолалар үтәү буйынса кисәләр үткәргәндәр. Төрлө ҡул эштәрен бергәләп башҡарыу, элеккесә, бергә йыйылып кис ултырыуҙар ҙа ғәҙәткә инә бара. Насар ғәҙәтле ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәрбиә эштәре алып барыу ҙа улар иғтибарынан ситтә ҡалмаған. "Хәтерләйбеҙ, баш эйәбеҙ" эстафетаһында мәктәп уҡыусыларының, йәштәрҙең ҡатнашыуына өлгәшкәндәр. Йәш быуын бигерәк тә ғаилә шәжәрәһен төҙөүгә, үҙ тамырҙарын 10-15 быуынға тиклем асыҡлауға, шулай уҡ 1812 йылғы һуғыш яугирҙәренең исемдәрен тергеҙеүгә бар көсөн һалған. Уларҙың эҙәрмәнлек эшмәкәрлеге айырыуса ҡыуандыра оло быуынды.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары Буранбай Рәфҡәт улы Күсәбаевтың йыйында ҡатнашыусыларҙы тәбрикләгәндә әйткән һүҙҙәре баймаҡтарҙың ошо маҡтаулы эшенә оло баһалау булып яңғыраны ла инде: "Был сарала ҡатнашҡан һәр кем үҙ халҡының ысын патриоты. Әле илйортобоҙҙа бындай илһөйәрҙәр, йәш быуынға халҡыбыҙҙың ҡиммәтле ҡомартҡыларын тапшырыр ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар бар һәм улар тарафынан киләсәк быуын, йәшәйешебеҙ, телебеҙ тураһында хәстәрлек күрелә икән, тимәк, милләтебеҙ артабан да үҙ-үҙен һаҡлап ҡаласаҡ. Бергә булғанда беҙҙең ниндәй ҙур көс хасил итеүебеҙҙе бөгөн тағы ла нығыраҡ аңлап ултырыуыбыҙ..."

## Барыһын да уртаға һалып...

Бәғзе берәүҙәр йыш ҡына "халҡыбыҙ бөтә, телебеҙ юҡҡа сыға" тип сафсата һатырға ярата. Бындай кешеләргә ошондай сараларҙа ҡатнашырға, янып йәшәгән һәм эшләгән аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр, алдынғы ҡарашлы йәштәребеҙ менән аралашырға кәңәш итәбеҙ. Һәр хәлдә, Баймаҡ ерендә ойошторолған ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар ҡоро башҡортмон тигән башҡорттоң йөрәгендә милләттең ғөрөф-ғәҙәттәре лә, бай тарихы ла, батырҙарының исемдәре лә яҙылғанлығын иҫбатланы. Аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ролен тергеҙеүҙең әһәмиәтен, "Кәңәш бирә йөрөгөҙ, кәңәш ала йөрөгөҙ..." тигән аҡылдың ни тиклем зарурлығын тойҙоҡ беҙ бында. Беҙҙең заман кешеләрендә һүрәнләнә төшкән бик күп сифаттарҙы шәйләп тә һоҡландыҡ. Шуларҙың береһе, әлбиттә, ихласлыҡ. Иң ихлас ихласлыҡ. Тағы. Кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте һоҡландырҙы. Һеҙгә таныш күренештер: хәҙер беҙҙең замандаштар үҙ-ара аралашҡанда бер-береһен бик тыңлап бармай, хәбәр өҫтөнә хәбәр һөйләп, бер-береһен бүлдерә һала. Ә был йыйында беҙ оло быуын вәкилдәренең аралашыу мәҙәнилегенә, береһе һөйләп бөткәс, икенсеһенең һүҙҙе ипләп кенә ялғап алып китеүе кеүек күптән онотола яҙған сабырлыҡ, тотанаҡлыҡ өлгөһөнә шаһит булдыҡ.

Ошо сарала күргән матур күренештәр, ишеткән аҡыл-фекер һуңынан ойошторолған түңәрәк ҡорҙа төп һығымта, "Ниндәй булырға тейеш ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар?" тигән һорауға яуап булып яңғыраны ла инде. Ошондай күркәм сифатлы, йәшәйеше менән дә, эшләгән эштәре менән дә өлгө булыр оло быуын кешеләренән төҙөлөргә тейеш һәр ауылда аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ҡорҙары. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан Ҡорҙарҙың уставы, положениеһы ла яҙылған. Уларҙа был ҡорҙарҙың эшмәкәрлеген этник мәҙәниәтте, рухи традицияларҙы, йолаларҙы, халыҡ педагогикаһының иң яҡшы өлгөләрен тергеҙеү, һаҡлау һәм үҫтереү, башҡорт ҡатын-ҡыҙының һәм ир-егетенең йәмғиәттәге һәм дәүләттәге социаль статусын күтәреү, уларҙың заман талаптарына ярашлы шөғөлө, карьераһына булышлыҡ итеү, шулай уҡ "Башҡорт ғаиләһе" статусын күтәреү, башҡорт ғаиләһен нығытыу буйынса йәмәғәт эшмәкәрлеген әүҙемләштереү йүнәлешендә ойошторорға, тиелә. Ҡорға йыйылған районлар вәкилдәре ошо бурыстарҙы йөкмәп, уларҙы баймаҡтар өлгөһөндә тормошҡа ашырырға тигән ашҡыныу менән таралышты. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ғаилә, әсәлек, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссияһы бындай ҡорҙарҙы башҡа районларҙа ла ойошторасаҡ.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА,**
**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**



Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар.

# КҮКСӘЙ

## йәки Ниңә көсһөҙ зат

**Шиғыр, йыр ярҙамында ғына кеше үҙенең барлыҡ тойғоларын, әйтер һүҙҙәрен, йөрәк серҙәрен башҡаларға еткереп бөтә аламы икән? Ай-һай, юҡтыр ул. Кеше күңеле икһеҙ-сикһеҙ дарья, унда йыһан киңлеге һәм мәңгелек төпһөҙлөгө һыя. Шуға күрә лә Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар байрамы алдынан Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында гөрләтеп "Наҙлы йөрәк серен асҡанда" исемле моң һәм илһам кисәһен үткәреүсе шағирәләребеҙҙең гәзит уҡыусыларыбыҙға әйтер һүҙҙәре бар. Улар: республикабыҙҙың Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары, күренекле шағирәләребеҙ Тамара ИСКӘНДӘРИӘ, Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА, Зөлфиә ХАННАНОВА, Гөлназ ҠОТОЕВА һәм Лариса АБДУЛЛИНА.**

**▸ Үҫмер сағымда мине бер ваҡиға ныҡ тетрәткәйне. Бер ағайға ҡыш утынға барыштым. Урманда тәрән көрт ятҡан саҡ. Ағайҙың екке аты - күк бейә, минеке - туры ат. Саналарға өймәләм итеп утын тейәнек тә, ҡайтыр яҡҡа ҡуҙғалырға булдыҡ. Тик көрт ярып алдан барырға тейеш булған Күксәй йөктө урынынан ҡуҙғата алманы ла ҡуйҙы. Алдан юл ярып барырға тейеш булған әрһеҙ Турысайҙы алға ҡуйырға башыбыҙ етмәгән. Мин аттың башынан әйҙүкләйем, ағай Күксәйҙе арттан ҡайыҙлай, бейә хатта тубыҡланып тартып ҡарай, тик йөк урынынан ҡуҙғалмай. Эй, хитландыҡ, эй, хитландыҡ, үҙебеҙ ҙә арып бөттөк, ағайҙың атты әрләп тауышы ҡарлыҡты. Бер аҙ тын алырға булдыҡ. Ҡараһам, Күксәй күҙенән йәш сығарып илап тора лаһа! Ағай менән нескә заттың күҙ йәшен күтәрә алмай, бер-беребеҙгә ҡараштыҡ та, күңелебеҙгә килеп һыҡыған әрнеүҙе нисек йоторға белмәй, тиҙ арала аттарҙы туғарып, саналарға алмаштырып ектек. Турысай һалған юлдан Күксәй ҙә ылдым ҡуҙғалды...**
**Бер нисә йыл үткәс кенә Күксәйҙең илау сәбәптәрен үҙемсә асыҡлай алдым кеүек. Беренсенән, ат затынан була тороп йөктө һөйрәй алмау ғәрлегенән иланы ул, икенсенән, быныһы инде беҙҙең ғәйеп, үҙ затының киләсәген тыуҙыра торған әсәне рәнйеттек бит беҙ ике ир-егет аталғаны. Ошо ваҡиғанан сығып, ҡыҙҙар, һеҙгә шундай һорау: ҡатын-ҡыҙҙы ошо Күксәй хәленә ҡуймаймы икән бөгөнгө кешелек, йәмғәтселек, ир-егеттәр?**

**Тәнзилә:** Күксәйҙән айырмалы рәүештә, һәр ҡатын-ҡыҙ өс сананы бер юлы һөйрәй. Баланы ҡарарға, иргә ярарға, донъяны ла алып барырға кәрәк. Ижадсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың инде дүртенсе санаһы ла бар. Тик бына ижад санаһын һөйрәй алмай, ошо Күксәй кеүек илап ултырырға яҙмаһын. Беҙ донъяла көслө булырға мәжбүр ителгәнбеҙ, ә бына ҡатын-ҡыҙға көслө булыуы ныҡ ауыр. Сөнки көслө кешенең елкәһенә менеп ултырырға теләүселәр бихисап. Ҡайһы саҡ илағылар килә хатта. Иркәләнеп кенә, наҙланып ҡына ял итке лә килә. Минең үҙемдең ауырлыҡҡа бирешмәүемдең стимулы ла бар. Иң тәүҙә ул стимул атайым менән әсәйем булды, унан балаларым, хәҙер иһә - шиғриәт.

**Лариса:** Күксәйҙән айырмалы рәүештә, ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы үҙ ҡулында. Әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ сүкеш, салғы тотоп, ҡар көрәп эшләп йөрөй икән, был уның үҙе һайлаған яҙмышы. Парадокс шунда: ҡатын-ҡыҙҙың наҙлы ла, бер үк ваҡытта көслө лә булғыһы килә.

**Гөлназ:** Беҙҙең беребеҙ ҙә наҙланып ҡына ултырған һәм ултырырға йыйынған ҡатын-ҡыҙ түгелбеҙ. Кем белә, бәлки, Хоҙай беҙҙе шиғри канал аша көслө булырға, яҡындарыбыҙҙы, халҡыбыҙҙы һаҡларға, яҡларға мәжбүр ҙә итәлер? Беҙ һәр таң атҡан һайын һикереп тороп йүгерергә, донъя йөгөн һөйрәргә мәжбүрбеҙ. Тормошоң ниндәй булһа, ижадың да шундай.

**Зөлфиә:** Минең ижад санаһын һөйрәй алмағаным өсөн күҙҙән йәштәрем аҡҡан мәлдәрем күп булды. "Тышаулы толпар" тигән шиғырымда шундай юлдар бар:

*Еңелдем мин, әммә*
*төңөлмәнем.*
*Рухым һыймай сынйыр бигенә.*
*Был донъяла тик көсһөҙҙәр генә*
*Хыялынан артҡа сигенә.*

Ысынлап та, наҙлы ғына булып өйҙә ултырып, ижад менән генә шөғөлләнге килә. Минең көслө булыуға тормош иптәшем дә, балаларым да шул тиклем өйрәнеп бөткән һәм улар минең өйҙә ултырыуымды күҙ алдына ла килтерә алмай.

**Тамара:** Ҡатын-ҡыҙға йөк аты итеп ҡарау - электән килгән хата. Гүзәл зат - ул ижадсы, яңылыҡты тыуҙырыусы. Балаһының киләсәге менән йәшәй ул. Кешелек мәҙәниәтен алға этәреүсе, әйҙәүсе көс ҡатын затынандыр ул. Тәүге орлоҡто сәсеп, ерҙән уңыш алыусы, унан икмәк бешереүсе, тәүге бишек йырын көйләүсе кем булған һуң? Әлбиттә, әсә! Шуға ла ауыр эш менән уны кәмһетеү, индәренә күтәргеһеҙ йөк тейәү - һис ярамаған эш, киләсәккә ҡарата зыян ғына түгел, енәйәт.

**▸ Ҡасан еңел булғаны бар икән ҡатын-ҡыҙға? Бигерәк тә ирҙәре мәңге яуҙа йөрөгән башҡорт ҡатын-ҡыҙына? Ирҙәр яуға барған да, ҡорбан булған, ауырлыҡтан ҡотолған, ә ул ауырлыҡ ҡатын-ҡыҙға төшкән. Тол ҡалыу, балалар бағыу, донъя көтөү йәки әсирә рәүешендә икенсе иргә, ҡәүемгә бала тыуҙырыу, ҡол булыу ауырлығы һ.б. Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли кейем атрибуттары ла наҙланыу, матур булып күренеү ихтыяжынан килеп сыҡмаған. Әйтәйек, һаҡал, сәсбау, ҡашмау иң тәүҙә ҡатын-ҡыҙҙы яуҙа һаҡлаусы тимер күлдәк ролен үтәгән һәм аҙаҡ ҡына биҙәүескә әүерелгән. Алҡа-һырғаларҙың да тәүге тәғәйенләнеше ҡатын-ҡыҙҙың аяулы йәнле булыуын аңлатҡан. Амазонка-ирғыҙҙар дәүерендә һуғыш кейеме кейгән ҡатын-ҡыҙҙы тик һырға-алҡаһына ҡарап ҡына өҫкә сыҡҡан дошмандары үлтермәйенсә, әсирә итеп алып ҡайтып, унан бала таптырғандар. Шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙың наҙланып ҡына ултырырға ла хаҡы юҡмы ни?**

**Зөлфиә:** Кешелекте шундай хафалар, борсолоуҙар солғап алғанда нисек наҙланып ҡына өйҙә ултыраһың инде? Тирәяғыбыҙҙа наркоманлыҡ, эскеселек, енси аҙғынлыҡ кеүек кире күренештәр хөкөм һөргәндә ни йөрәгең етеп тыныс ҡына йәшәп ятаһың? Шағирәләр нескә күңелле халыҡ. Улар бар нәмәне йөрәгенә яҡын ала. Ил яҙмышын да, тел яҙмышын да, халыҡ яҙмышын да. Әлбиттә, тормош иптәшең, яҡындарың һине тик үҙенеке итеп кенә күргеһе килә, әммә шағирә булараҡ, һин улар өсөн генә йәшәй алмайһың, сөнки һин - халыҡтыҡы. Халыҡ бөгөн шиғриәткә һыуһаған. Әлмисаҡтан сәсәндәрҙең һүҙенә ҡолаҡ һалып, фекер туплау, ҡәлепте таҙалау башҡорт халҡының генетикаһына һеңгән. Беҙ яңынан-яңы әҫәрҙәр ижад итеп, халыҡ араһына сығабыҙ икән, тимәк, Аллаһы Тәғәлә алдындағы үҙ бурысыбыҙҙы үтәйбеҙ. Хоҙай Тәғәлә юҡтан юҡҡа беҙҙе ошо юҫыҡта үҙенең өлөшлө бәндәһе итмәгән бит.

**Тәнзилә:** Ҡайһы берәүҙәр, шиғыр заманы үтте, тип иҫәпләһә лә, минеңсә, милләт йәшәй икән, уға һәр саҡ шиғриәт кәрәк буласаҡ. "Бәйләнештәр" селтәрендә оло кешеләр менән бер рәттән, йәш кенә балалар ҙа дуҫлыҡ тәҡдим итә һәм улар барыһы ла шиғыр һорай. Ҡайһылары хатта шәхсән үҙенә генә шиғыр яҙып биреүендә үтенә. Ҡыҫҡаһы, наҙланыуға бәйле тыныс тормош беҙгә мәңге тәтемәйәсәк һәм кәрәкмәй ҙә.

**Лариса:** Әгәр ҙә беҙҙән шиғриәтте алып ташлаһаҡ, Зөлфиә лә, Гөлназ да, Тәнзилә менән Тамара апайҙар ҙа, мин дә бөтөнләй икенсе кеше буласаҡбыҙ. Ул сағында, бәлки, беҙгә наҙланып өйҙә генә ултырыу ҙа күберәк эләгер ине.

**Гөлназ:** Шағирәнең ҡоралы - күңел һәм һүҙ. Шағирә күңеле һәм һүҙе бер бөтөндә тәшкил итһә генә башҡаларҙың да бөтөнлөгөнә булышлыҡ итә алалыр. Ә инде донъяла сайралмайынса бөтөн көйө һаҡланыр өсөн ҙур көс талап ителә. Беҙ ҡайһы саҡ ысынбарлыҡтан айырылып булһа ла хыял күгендә һайрарға тырышабыҙ, әммә һынауҙар беҙҙе кире ергә тартып төшөрөргә итә. Нисек кенә ҡыйын булһа ла, беҙ юғарыла булырға тейешбеҙ.

**Лариса:** Шағирә һәр нәмәгә ҡош бейеклегенән ҡарай белергә, шул уҡ ваҡытта трамвайға билет хаҡын, икмәккә хаҡ күпмегә артҡанын да белергә тейеш. Тамсыны ла, диңгеҙҙе лә тоя шағирә. Беҙ кисәлә матур күлдәктәр кейеп, шиғыр уҡығанда кемдәрҙер айсбергтың өҫкө өлөшөн генә күрәсәк, һәр бер шиғыр аҫтында оло кисереш, ғазап, фажиғә ятҡанын улар абайламаясаҡ та, һәм был тәбиғи.

**Тамара:** Башҡорт ҡатынының иһә наҙланып ултырырға форсаты ла булмаған, ирҙәр яуҙа саҡта ил-йорт мәсьәләләрен хәл итеүсе, ир балаларҙы тәрбиәләүсе лә ул бит. Әйткәндәй, әлеге һөйләшеүҙә ҡатнашҡан шағирәләрҙең өсәр-өсәр ир бала тәрбиәләүе тәрән мәғәнәгә эйә. Шағирә иңенә Хоҙай бик ҙур рухи бурыс һала... Шағирә алдына Хоҙай (беҙ был урында, заман, тибеҙ) бик тәрән һынауҙарын да ҡуя.

**▸ Философияла доминанта тигән төшөнсә бар. Ул өҫтөнлөк итеүсе факторҙы аңлата. Психологтар әйтеүенсә, әсә кеше үҙенең һаулығы һәм йәше еткәнсе бала табырға бурыслы. Әгәр ҙә ул быны эшләмәһә, күмәк балалар араһындағы доминанта факторы бойомға ашмаһа, үҙ-үҙендә даһиҙы ерләй икән, йәғни ил, милләт өсөн даһи булырҙай шәхес тыумай ҡала. Ошонан сығып һеҙгә һорау: һеҙ үҙегеҙгә тәбиғәт һәм Хоҙай тарафынан һалынған әсәлек потенциалын тулыһынса аса алдығыҙмы?**

**Лариса:** Мин әсәлек потенциалын тулыһынса файҙаланып бөтмәнем, тип уйлайым. Студент саҡта алып барған көндәлегемдә лә иң ҙур теләгемде биш бала әсәһе булыу тип яҙғайным. Мин атайһыҙ, олатайһыҙ, ағайһыҙ үҫтем, шуға Хоҙай миңә гел малайҙар бүләк итте. Әле кинйә улым Азамат менән өйҙә тик кенә ултырыу үҙемә лә оҡшап китте...

**Тәнзилә:** Мин дә Лариса кеүек өс малайҙың әсәһемен. Өсөнсөһөн ҡыҙ тип көттөм. Әгәр ҙә мөмкинлегем булһа, ҡыҙ тапҡансы бала табыр инем. Лариса, һин тәүәккәллә, бәлки, һинең дүртенсеһе ҡыҙ булыр.

**Зөлфиә:** Әсәйем мине ҡырҡ дүрт йәшендә тапҡан, атайыма ул саҡ илле ете йәш булған. Шуға күрә, әгәр ҙә Хоҙай бала бирә икән, шатланып ҡабул итәсәкмен. Һәр бала Хоҙайҙың бүләге булып тыуа, унан нисек итеп баш тартмаҡ кәрәк?

**Гөлназ:** Минең әсәйем һигеҙ, атайым ун балалы ғаиләлә тыуып үҫкән. Беҙ атайым менән әсәйем ғаиләһендә өс бала үҫтек. Бер бала атай, икенсеһе - әсәй, өсөнсөһө кешелектең һанын арттырыр өсөн, тиҙәр. Ҡайһы бер ҡатындар әсә булыуҙан, бала бәхете күреүҙән мәхрүм. Барыһын да: ҡайһы ботаҡты үҫтерергә, ҡайһыһын үҫтермәҫкә - Аллаһы Тәғәлә үҙе хәл итә. Әгәр ҙә ҡатынға комплимент яһарға теләһә, Аллаһы Тәғәлә уға ҡыҙ бала бирә, тип тә әйтәләр. Мин бер шиғырымда ҡыҙ балаға әсә булырға теләүем хаҡында яҙғайным. Тимәк, минең барыһы ла алда. Мин комплимент көтәм.

**Тамара:** "Бер бала - ярты бала, ике бала - бер бала, өс бала ғына бала", тигән әйтем бар халыҡта. Мин шуға таяндым. Аллаға шөкөр, хәл иткес аҙым алдында торған ҡатындарға биргән дөрөҫ кәңәшем өсөн улар хәҙер ғүмер буйы үҙемә рәхмәтле.

**▸ Һеҙгә тағы ла бер һорау: хәҙерге тәжрибәгеҙ, аҡылығыҙ менән ирҙәрҙең барлыҡ ыңғай һәм кире яҡтарын белгән кеше булараҡ, әгәр ҙә ир булып тыуған булһағыҙ, һеҙ ниндәй булыр инегеҙ һәм нисек йәшәр инегеҙ?**

**Гөлназ:** Уй-й-й-й, ауыр һорау. Нисек булыр инегеҙ, тип, шулай уҡ булыр инек инде.

**Тәнзилә:** Мин дә тап ошолай булыр инем. Характерым, донъяға ҡарашым буйынса ла, ир булғанда ла ошолай булырмын һымаҡ. Әхмәр, беҙ бер осорҙа шиғриәткә килдек. Һеҙ, Рәмил, Рәйес, Ғәбиҙулла әллә нисәмә ҡыҙҙарға ғашиҡ булып бөттөгөҙ, исмаһам, берегеҙ-бер миңә ғашиҡ булманы. "Эй, һиңә ғашиҡ булып булмай, һин малай һымаҡһың", тип әйтә торғайны Рәмил, Рәйес мәрхүмдәр. Гүрҙәре яҡты булһын. Ирем бөтә донъямды үҙе алып бара, миңә һәр яҡтан ижад итергә мөмкинлектәр тыуҙырған. Ҡыҫҡаһы, донъя көтөүҙе ул үҙ өҫтөнә алған. Уға бының өсөн рәхмәтлемен. Шулай булғас ни, мин ир булһам да, эштән ҡайтыуыма барыбер иҙәнемде балаларым йыуып, барыбер ашарға ҡатыным бешерер ине, тием.

**Лариса:** Мин үҙемдең ирем һымаҡ булыр инем. Моғайын, "Салауат Юлаев" командаһында хоккей уйнар инем. Ғөмүмән, үҙеңде ир итеп күҙ алдына килтереүе бик ауыр. Мин, ҡыҫҡаһы, ҡатын-ҡыҙ ғына булып ҡалырға риза.

**Зөлфиә:** Минең ир булғым бөтөнләй килмәй. Сөнки йәннәт - ул әсәләрҙең аяҡ аҫтында,

✓ *Икенсе бер хәҙистә: "Ҡатын-ҡыҙҙар - Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге урынбаҫарҙары", - тиелә. Аллаһы Тәғәләнең барса яратҡан бәндәләрен ер йөҙөнә ҡатын-ҡыҙ тыуҙырған. Ислам динендә ҡатын-ҡыҙҙың дәрәжәһе бик юғары.*

әсәлек - бөйөк вазифа, шуның өсөн үҙендә башҡа енес вәкиле итеп күҙ алдына ла килтергем килмәй. Икенсе бер хәҙистә: "Ҡатын-ҡыҙҙар - Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге урынбаҫарҙары", - тиелә. Аллаһы Тәғәләнең барса яратҡан бәндәләрен ер йөҙөнә ҡатын-ҡыҙ тыуҙырған. Ислам динендә ҡатын-ҡыҙҙың дәрәжәһе бик юғары.

**Тәнзилә:** Шуныһы ғына үкендерә һәм әсендерә: нишләптер шәжәрәгә ирҙәр генә яҙыла, ҡатын-ҡыҙ яҙылмай...

**Тамара:** Һәр ирҙең йөрәгендә ҡатын ятҡан һымаҡ, һәр ҡатындың йөрәгендә ир-егет ултыра. Әгәр шулай булмаһа, Са-тыумай ҡала, милләт зәғифләнә!

**Гөлназ:** Минеңсә, медиктарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалып эш итергә кәрәктер. Әгәр ҙә табиптар һаулыҡ торошо буйынса яралғының үсешен туҡтатырға тигән ҡарар сығарһа, хистәренде тыйып булһа ла был аҙымға бараһың инде. Яңыраҡ табиптар бер ҡатынға тыуыр балаһы зәғиф булырын әйтеп, аборт яһарға тәҡдим иткән. Ул икеләнеп ҡалғас, артабан уға шундай кәңәш биргәндәр. Әгәр ҙә ул үҙенең ғүмерен ошо зәғиф балаһын ҡарар өсөн бағышлаһа, уның башҡа һау балалары тыумай ҡаласаҡ, тип дәлил

лаһын да үҙ ҡулдары менән ерләп ҡуйҙы. Апай үҙе лә бөгөн донъяла юҡ инде...

**Тамара:** Йыртҡыс та үҙ балаһын юҡ итмәй. Аҡылы быуаттар буйына үҫешкән "камил" зиһенле кеше генә был аҙымға бара. Ни өсөн? Йәшәргә ере юҡ, аҡсаһы етмәй, ваҡыты етмәйме? Ошо сәбәптәрҙән яһалған тар ҡоролма эсендә ҡала ҡатын-ҡыҙ. Нимә эшләргә? Һайлау алдында торғанда уға социаль мәсьәләләрҙән юғарыраҡ күтәрелергә кәрәк. Янында кешеләр дөрөҫ кәңәш бирергә тейеш. Хоҙай биргән баланы юҡ итеү - ҙур гонаһ. "Йән биргәнгә йүн бирер", ти халҡы-

бер енестән. Бер-береһен яҡшы аңлай. Ә ҡыҙҙар - бөтөнләй икенсе донъя, үҙҙәренә бөтөнләй икенсе иғтибар талап итә. Мин үҙем дә йыш ҡына, улым алдында үҙемде дөрөҫ тотам микән, тип, үҙемде "ситтән күҙәтеп алам". Сөнки миңә ҡарап, ул үҙенең кәләшен һайлаясаҡ. Атаһы менән икебеҙҙең мөнәсәбәттәрҙе күҙ уңында тотоп, үҙенең ғаиләһен ҡорасаҡ.

**Гөлназ:** "Ҡыҙ балаҡайымды ҡыҙғанам", тип әсәй кеше түгел, атай кеше йырлай.

**Тәнзилә:** Беҙ ғаиләлә дүрт малай, ике ҡыҙ үҫтек. Алтауыбыҙҙың береһе, тик мин генә атайыбыҙға оҡшағанмын. Хо-



# НИҢӘ ИЛАҺЫ,

## көслө булырға тейеш?

лауатты, Зәкиҙе, Шәйехзаданы ҡатындар нисек табыр ине икән? Әсә һөтө менән бирелә бит ул ҡаһарманлыҡ. Ир булып тыуһам, күп һөнәр эйәһе булыр инем, тип уйлайым. "Уйы азат, эшкә маһир булһын, һөйләшһен тик башҡорт телкәйендә", -тип, малайҙарыма теләк итеп шиғыр яҙғайным, бәлки, үҙем дә шулай булырға тырышыр инем. Азат фекерле ир кешегә, ай-һай, бер заманда ла еңел түгел. Ҡатын-ҡыҙ булыуыбыҙ, бәлки, беҙҙе ҡотҡаралыр ҙа.

▸ **Аборт мәсьәләһенә ҡарашығыҙ нисек? Диндә ул кеше үлтереүгә тиң гонаһ, енәйәт тип ҡарала...**

**Зөлфиә:** Үҙем ҙур тетрәнеүҙәр кисереп, "Кот" тигән поэма яҙғайным. Әҫәр ҙур бәхәстәр тыуҙырҙы, бигерәк тә ирҙәр, ниңә был әҫәрҙе яҙҙы икән, тип әйтте. Бер осрашыу ваҡытында ни өсөн был темаға мөрәжәғәт итеүем хаҡында ла һорағас: "Мин был әҫәрем менән бер генә кешенең ғүмерен һаҡлап алып ҡалһам да, үҙ маҡсатыма өлгәшкән булыр инем", - тип яуап бирҙем. Миңә бер ир: "Минең туғандарым араһында берәрһе балаһын табырғамы-юҡмы, тип икеләнеп йөрөһә, тәүҙә ошо поэманы уҡы, шунан һуң абортҡа барырһың, тип әйтәм. Поэмағыҙҙы уҡып, абортҡа бармай ҡалғандары ла булды", - тип шылтыратып әйтте. Мин абортҡа ҡырҡа ҡаршымын. Халҡыбыҙҙың күпме аҫыл ул һәм ҡыҙҙары

килтергәндән һуң ғына ул ризалығын биргән.

**Лариса:** Аборт, ғөмүмән, һөйләшеүгә ауыр тема ул. Тыумай ҡалған балалар төшкә инеп ыҙалата.

**Зөлфиә:** Ҡайһы ваҡыт табиптар менән дә, ирең менән дә бәхәскә ингән саҡтар була ул. Мәҫәлән, мин өсөнсөгә балаға уҙғас, ирем өлкәнәйә барыуыбыҙҙы иҫемә төшөрөп: "Ошо йәштә ата-әсә булыу уңайһыҙ ҙа инде, кеше көләр," - тип ҡаршы төшөп маташты. Беҙҙең икебеҙгә лә ул сакта 36-шар йәш ине. Иҫәпкә торорға барғас та, табиптар төрлө сәбәп табып, мине абортҡа ҡыуаланылар. Төштәремә инеп үҙенең барлығын белдергән сабыйымдан баш тарта буламмы һуң, риза булманым! Табиптар дауаханаға һалып ҡуйып, күпме ваҡыт һаҡланырға ҡушһалар, шунсама яттым, шулай итеп Әминәбеҙҙе табып алдым. Хәҙер атаһы Әминәне шул тиклем ярата! Шуныһы ҡыҙыҡ: 22 йәшебеҙҙә донъяға яралтҡан улыбыҙ Илгизгә атаһы дуҫиптәш кеүек, 27 йәшебеҙҙә тыуҙырған Гүзәлебеҙгә бер туған ағай кеүек, ә бына 36 йәшебеҙҙә көтөп алған ҡыҙыбыҙ өсөн ул ысын мәғәнәһендә атай булараҡ өлгөрөп етте кеүек.

**Лариса:** Бер апай үҙ ғүмерендә утыҙ ике тапҡыр аборт эшләткән. Үҙенең өс балаһы бар ине. Бер мәл төшөндә ул утыҙ ике аҡ ҡанатлы фәрештәнең өс балаһын ҡамауға алып, ҡайҙалыр алып киткәнен күргән. Тәүбә, апай өс ба-

быҙ. Әйткәйнем инде, әлхәмдүлилләһ, Ер йөҙөндә минең үҙ балаларымдан тыш, тағы балаларым бар - әсәйҙәренә хәл иткес кәңәш биреп, ҡотҡарып ҡалған балалар. Быны белеү күңелдә йылыта.

▸ **Ҡыҙ бала - атаһына оҡшаһа, ир бала - әсәһенә оҡшаһа, бәхетле була, тиҙәр. Тағы ла ҡыҙым уллы булмай, әсә булмаҫ, улым ҡыҙлы булмай, ата булмаҫ, тип тә әйтәләр. Быны нисек аңларға була икән, әллә әйтем дөрөҫ түгелме?**

**Гөлназ:** Ҡыҙ ғүмерендәге тәүге ир кеше - уның атаһы. Ул атаһының образында үҙенең ирен күрә. Бер әхирәтемдең ҡыҙы: "Мин атайыма кейәүгә сығыр инем", - тип тә аптыратҡан. Бәләкәй бала өсөн атаһы - идеаль ир. Миңә лә атайым шулай булып тойолдо, әсәйем ҡайһы берҙә "мыҡты атайың бар шул" тип асыуланып та ала торғайны. Минеңсә, атаһы яратҡан ҡыҙҙан да бәхетле кеше юҡтыр донъяла. Икенсе әйтем ҡыҙ баланың атаһына, ир баланың әсәһенә нығыраҡ бәйле булыуынан килеп тыуғандыр. Икенсенән, ул тапҡан ҡатын ҙур ғәмәл башҡарған булып иҫәпләнә, уның ире алдында ла дәрәжәһе юғарыраҡ. Бәлки, шунадыр?

**Зөлфиә:** Мин ошолай тип уйлайым. Мәҫәлән, атайҙар ҡыҙҙарын назлап, ҡәҙерләп үҫтерә. Балаларының әсәһе лә кем өсөндәр бик аяулы, бик ҡәҙерле бала икәнен аңлай ул. Улдарын үҫтергәндә үҙемде уның алдында нисегерәк тотайым икән, тип баш ватаһы түгел, сөнки ул уның күсермәһе. Улар

лоҡ-фиғелебеҙ ҙә бер үк. Атайым һымаҡ яралтҡаны өсөн Аллаһы Тәғәләгә ныҡ рәхмәтлемен.

**Тамара:** Тормошта күҙәтеүҙәрем аша шундай һығымтаға килдем. Атаһы яратҡан ҡыҙ киләсәктә үҙ-үҙенә ныҡлы ышанған, көслө шәхес булып үҫә. Ир-егеткә лә әсәһенең һөйөүе, аңлауы бик мөһим, тип уйлайым.

**Лариса:** Беҙҙең бишебеҙҙең дә улдарыбыҙ бар. Зөлфиәнең ҡыҙҙары булғас, ире Айбулат атай булып өлгөрөп еткән. Тимәк, беҙгә барыбыҙға ла берәр ҡыҙ табып, ирҙәребеҙҙе атай итеү бурысы тора.

▸ **Һеҙ әлеге шиғриәт кисәһен үткәреп, тамашасыға, халыҡҡа нимә әйтергә теләнегеҙ? Шиғырҙарҙа әйтелгәндәрҙән тыш, тағы ла ниндәй фекерегеҙ ҡалды?**

**Тәнзилә:** Йәштәребеҙ төрлөсә булһа ла, беҙ бер быуын шағирәләре кеүек татыубыҙ. Әйтәйек, беҙгә тиклемге шағирәләр араһында ундай үк берҙәмлек юҡ һымаҡ. Улар таркауыраҡ. Ә беҙҙең быуын бөтөнләй икенсе төрлө. Һәр хәлдә, беҙ бер-беребеҙгә яу түгел, таяу икәнлегебеҙҙе раҫларға теләнек.

**Лариса:** Беҙҙең барыбыҙҙы ла Бабич берләштерә һәм уның байрағы аҫтында сәхнәгә сығып баҫабыҙ икән, тимәк, беҙгә лә үҙ һүҙебеҙҙе ныҡлы итеп әйтер мәл килде. Телебеҙ яҙмышы борсой беҙҙе, мәктәптәр ябыла, дәүләтте нығытып, тотоп торған бағаналар берәм-берәм ҡолаған мәлдә өнһөҙ була алмайбыҙ. Беҙ әле генә һиҙмәйбеҙ, берәр ун йылдан бө-

төнләй кире ҡайтарып булмай торған процестар башланыуы бар.

**Гөлназ:** Беҙ үҙ һүҙебеҙҙе әйтергә өлгөрөп еттек һәм әйтер һүҙебеҙ ҙә бар.

**Тамара:** Әлеге ҡатмарлы заманда кешегә йылы һүҙ етмәй. Ир-ат шағирҙар хәҙер күберәк сатираға, усал шиғырҙарға тартыла. Йәмғиәтебеҙгә шағирә моңо кәрәк. Саф шишмә сылтырауы, бәпес көлөүе ишетелһен сәхнәнән, һәм ошо матурлыҡты һаҡлау, ҡурсалау, бәпләү зарурлығы яңғырһын. Ҡатын-ҡыҙҙың "гүзәл зат" тип юҡҡа ғына аталмағаны күренһен. Тамашаға килгәндәр үҙҙәренең күңеленә бүләк итеп һүнмәҫ моң алып ҡайтһын, шул илһамлы хис һәр береһенә артабанғы тормошонда көс-дәрт биреп торһон. Бына ошо ине маҡсатыбыҙ.

**Зөлфиә:** Беҙ биҙәкле күлдәктәрҙә булһаҡ та, сәхнәгә биш яугир ҡатын булараҡ сығып баҫтыҡ. Барыбыҙ ҙа әсәләр. Әлхәмдүлилләһ, барыбыҙҙың да балаларыбыҙ яҙған шиғырҙарыбыҙҙы үҙ телебеҙҙә һөйләй ала. Быныһы беренсе яуыбыҙ. Беҙҙе тыңлап, кемдеңдер күңеле таҙарынғандыр, кемдеңдер рухы уянғандыр! Быныһы икенсе яуыбыҙ. Өсөнсө яуыбыҙ шул булды. Беҙҙең кисәгә Башҡортостаныбыҙҙың бар төбәктәренән ағинәйҙәребеҙ йыйылып килде. Кисәбеҙҙән һуң халҡыбыҙҙың Бәндәбикә әүлиә, Кесебикә Байрасова, Рабиға Ҡушаева, Зәйнәп Бишева, Һәҙиә Дәүләтшина кеүек арҙаҡлы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың рухына Ҡөрьән аяттары уҡытып, илебеҙгә, халҡыбыҙға именлек теләнек. Ағинәйҙәребеҙ фатихаһында Башҡортостаныбыҙҙың барса ҡатын-ҡыҙҙарына һөйкөлө ир ҡатыны, гүзәл әсә булырға насип итһен. Эшләгән эштәребеҙ гел уң булһын! Иманлы, ғилемле, ҡөҙрәтле булайыҡ! Яҡындарыбыҙ өсөн дә, халҡыбыҙ өсөн дә ғәзиз булырға яҙһын, ҡәҙерле әхирәттәр!

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ысын мәғәнәһендәге рух, күңел, йөрәк, мөхәббәт байрамына әүерелде "Нефтсе" мәҙәниәт йортонда үткән шағирәләр сығышы. Улар күптән инде милләт әсәләре. Әгәр ҙә һәр бер шағирәнең ижади асылын бер генә һүҙ менән ҡылыҡһырларға ҡушһалар, мин үҙемсә уларҙы түбәндәгесә нарыҡлар инем: Тамара Искәндәриә - миһырбанлы, Зөлфиә Ханнанова - ихлас, Тәнзилә Дәүләтбирҙина - сая, Гөлназ Ҡотоева - серле, Лариса Абдуллина - рухлы шағирә. Әлбиттә, был сифаттар ҡыҙҙарыбыҙҙың барыһында ла бар, әммә былары тик уларҙың үҙенсәлеге булып бүлтәйеп торғаны. Ә бит ошо сифаттарҙың барыһы ла башҡорт ҡатын-ҡыҙына хас, һәм был кисә шул хәҡиҡәтте лә раҫланы кеүек: беҙ бергә, берҙәм булғанда ғына көслө һәм һәр ғәмәлгә бер төптән тотонғанда ғына юлыбыҙҙағы ҡаршылыҡтарҙы еңә аласаҡбыҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## Г. Черниковтың сере

Дауыт Һиҙиәтов өйҙә йоҡлап ҡына ятмаған икән: беҙҙең Өфө урамында һөйләшеп торғанды тейешле ағай-энегә еткереп, фекер алышҡан, улар араһынан Фуат Әсәҙуллин хат яҙып ебәрә һалған. Тап бына ошо Әсәҙуллин, һуғыш ветераны, Александр Матросовтың биографияһын асыҡлау буйынса эш башлап ебәргән дә! Һиҙиәтов хәбәр итеүенсә, Фуат Ғилметдин улы ете йыл әрме хеҙмәтендә булған, һуғышта ла ҡатнашҡан, хатта ике Дан ордены менән наградланған, 1944 йылда, фронтта Коммунистар партияһына ингән. Һуңынан колхозда тәҙәлөш бригадаһы етәксеһе, фермала, артабан хужалыҡ эштәре буйынса мөдир булған. Уны иптәштәр суды председателе, ревкомиссия председателе итеп тә һайлағандар.

Ауылдағы ифрат та яуаплы вазифаларҙың шәүләһен генә кәүҙәләндергән был һүҙҙәрҙән ни өсөн шулай тәҙеп яҙылыуын мин шунда уҡ төшөндөм: хат берәй тәкәббер әҙәмдең ҡулына барып эләгә ҡалһа, беҙ ҙә ятып ҡалғандарҙан түгел, ә йәмәғәт тормошонда беҙҙең дә елле генә урыныбыҙ бар, тип алдан хәстәрләп яҙылғанға оҡшаны ул.

Хат хәҙер инде Фуат Әсәҙуллиндың теле менән Ҡунаҡбай ауылы йәмәғәтселегенең төп маҡсатын да белдерә ине: "Беҙ, Ҡунаҡбай халҡы, А. Матросов хаҡында әлегә хәтлем яҙылғандың береһен дә кире ҡаҡмайбыҙ. Барыһы ла, элек нисек булған, шулай ҡала. Беҙгә уның ниндәй исем аҫтында йөрөүе барыбер, әммә уның биографияһын аҙағынаса асыҡлауҙы, тыуған ерен билдәләүҙе үҙебеҙҙең бурысыбыҙ тип иҫәпләйбеҙ".

Һай, афарин! "Үлтерҙе" бит был кеше - ысын йәмәғәт эшмәкәре кеүек фекер йөрөтә, элек яҙылғандың береһен дә инҡар итмәйбеҙ, тип, ҡайһылай киң күңеллелек күрһәтә.

Фуат Әсәҙуллин бына тағы ни тип яҙа ине: "А. Матросовтың ысын исеме - Шакирйән. Атаһы - Юныс. Шакирйән һуғышҡа тиклем бер нисә мәртәбә тыуған ауылына ҡайтып күренгән". Шунан Әсәҙуллин был хаҡта яҡшы белгән ауылдаштарының исемдәрен һанап сығып, Тажикстанда йәшәгән ниндәйҙер Григорий Иванович Черниковтың рәҫлауына айырыуса баҫым яһай ине. Конвертҡа ошо Черников атлы кешенең рус телендә яҙылған хатын да һалғайны. Бына ул хат:

"Һаумыһығыҙ, хөрмәтле Фуат!

Тажикстандан күп сәләм ҡабул итегеҙ. Шулай уҡ минең туған-тыумасаларға ла сәләм күндерегеҙ. Хәҙер мин, Шурик йәки




Шакирйән тураһында нимә беләм, шул хаҡта һөйләргә теләйем. Ул беҙҙең ауылдан 1934 йылда сығып китте. Ике йыл үткәс, 1936 йылда, кире ҡайтты, беҙҙең кеүек уҡ, бер аҙ эшләп алды. Бәлки, хәҙер Учалы ҡалаһы ултырған урында хәтерләйһеңдер? Уның эргәһендә һаҙран урын булып, унда колхоз иҫке таҡталарҙан һарай төҙөп, беҙ шунда йоҡлап йөрөй торғайныҡ. Ул да, килгәс унышҡа тип, беҙҙең менән бергә ер тырматты. Шул саҡта уҡ ул, мине Шакир тип түгел, ә Шурик тип атағыҙ, ти торғайны.

Ул саҡта, үҙең беләһең, күп кеше үҙ телен онотто. Уның менән дә шул хәл килеп сыҡты. Ә ҡулына рус газетаһы килеп эләкһә, шул хәтлем яҡшы уҡыр ине, хатта өлкәндәр аптырап китә ине.

Тыуған ягын ҡалдырырға йыйынғас, ул мине лә үҙе менән китергә өгөтләй башланы: әйҙә, ти, китәйек, берәй балалар йортона барып урынлашырбыҙ, ни тиһәң дә, бергә булырбыҙ. Тик мин ни өсөндөр шөрләнем, өйҙә тороп ҡалдым. Бер аҙ ваҡыт үткәс, мин дә йыйындым, әлбиттә, һәм бер үҙем сығып киттем йәки ил гиҙҙем. Йөрөй торғас, Ҡарғалы балалар йортона барып эләктем, ул Ырымбур өлкәһендә. Был балалар йортонда мин 1939 йылға тиклем йәшәнем, ләкин өйөмдә һағынғас, детдом директорына минең атайым менән әсәйем барлығын әйттем. Улар ауыл Советынан быны раҫлаған яуап алғас, оҙатыусы кеше бирәп, мине өйөмә уҡ килтереп тапшырып киттеләр.

Ләкин мин тағы сығып киттем. Бер мәл Өфөлә йөрөй инем-бына шунда, Шурик (Александр) менән осраштым да инде. Ул миңә ҡайҙалыр Өфө эргәһендә балалар колонияһында йәшәүен, хәҙер Матросов Александр булып йөрөүен, активист булыуын, шуға күрә уға ышанып күп нәмәләр тапшырыуҙарын, әле малайҙар менән ҡалаға кино ҡарарға килеүен һөйләне. Ул миңә, әйҙә, беҙҙең колонияға, беҙҙә бик һәйбәт, тине. Мин тәүҙә ризалаштым, тик аҙағырак кире уйланым. Беҙ, шулай итеп, хушлаштыҡ...

*1986 йылдың 5 декабре*".

Ышанмайынса, әммә бик ғәжәпләнеп уҡыным мин был юлдарҙы. Хатҡа ышанырға мөмкинме? Ләкин был кеше бит, бөтәһен дә белгән кеүек, бәйнә-бәйнә теҙә. Уйлап табып буламы ундай нәмәне? Ә инде яҙылғандар ысын икән - был бит иҫ киткес асыш! Тик, кем һуң ул Черников һәм бында Тажикстандың ни ҡыҫылышы бар? Бер аҙна ла үтмәне, Фуат Әсәҙуллиндан Черниковтың икенсе хаты килеп төштө.

"...Фуат, һинең һорауыңа яуап итеп, иң тәүҙә үҙем тураһында хәбәр итәм. Мин, Г.И.Черников, хәҙер рус милләтле булып йөрөйөм. Әгәр минең менән дә шул уҡ хәл килеп тыуһа, минең дә ҡасандыр Ирғәлин Ғәзнәүи Ғәлиевич икәнлегемде берәү ҙә белмәҫ ине. Ә бит быларҙың барыһы ла беҙҙең ҡараусы, тәрбиәсе булмауҙан килеп сыҡты. Бәләкәй саҡтан алып. Аҙ булдымы ни: балалар ҡабул итеү пунктының береһенән ҡасаһың, икенсеһенә барып эләгәһең, башыңа ни тура килә, шул исемде әйтәһең. Бына ни өсөн алдым мин хәҙерге фамилиямды.

Ә унан һуң беҙҙең кеүек ҡарауһыҙ йөрөгән малайҙарҙың үҙҙәренең законы бар ине, әгәр һин урыҫ түгел, ә башҡа милләт малайы икән, һиңә ышанманылар, хатта ситләшә торғайнылар. Шуға күрә беҙ үҙ фамилиябыҙ, исемдәребеҙҙе алмаштырырға тырыша инек.

Хәҙер Шурик хаҡында. Һеҙ үҙегеҙ ҙә хәтерләмәйһегеҙме ни уның ниндәй булыуын?! Беҙ тиңдәштәр тиерлек инек тә һуң.

Ә бына мин нимәләр иҫләйем. Балалар баҡсаһына, унан һуң нисек уҡырға барыуым хәтерҙә. Баҡса ул ваҡытта Фәтҡуллажан бабайҙың ҡаршыһында йәшәгән муллала йортонда ине. Беҙгә ботинка, ыштан биргәндәре лә иҫтә, Шакирйәнгә лә бирҙеләр.

Ә уларға барһаҡ, Юныс бабай нимә булһа ла һөйләй торғайны.

Беҙ уҡый башлағас, 2-се класта шикелле, Шурик өйҙәренән ҡыҙыл тауар килтерҙе - белмәйем, әллә атлас, әллә ебәк. Тауарҙы киҫкеләне лә балаларға тарата башланы, бигерәк тә ҡыҙҙарға... Күпмелер ваҡыт үткәс, мәктәптә кино күрһәттеләр. Иртәгәһенә ул, мәктәпкә бөтәһенән дә алдараҡ килеп, кинотаҫма һалынған ҡумтаны алып китеп, тәнәфес ваҡытында тураҡлап, киҫәктәрен малайҙарға таратты. Шунан һуң китте ул ауылдан. Йыл ярымлы, әллә ике йылдан һуңмы, ул әйләнеп ҡайтты һәм шунда, миңә Шурик тип өндәшегеҙ, тине.

Һин һорайһың, күҙҙәре, танауы нисек ине, тип. Ентекләп хәтерләмәйем, әлбиттә. Ә бына өҫкә тештәре киң, һирәгерәк ине. Быныһын яҡшы иҫләйем... Ул саҡта беҙ күл буйында эшләй инек - күлдең исеме Юшалы ине шикелле.

Өфөлә осрашҡанда улар алтыуы, етеме кеше ине. Мин уға: "Һаумы, Шакир!"-тип ҡысҡырғайным, ул асыуланды ла, малайҙарҙан ситкә алып китеп: "Мин хәҙер Матросов Александр. Был малайҙар янында улай өндәшмә, һин бит беҙҙең закондарҙы беләһең",- тине.

Минең: "Ә һин ҡайҙа хәҙер?- тигән һорауыма, ул ҡаланан алыҫ түгел Сиған яланында йәшәүе, балалар колонияһында уҡыуы, көнөнә дүрт сәғәт эшләүҙәре тураһында һөйләне. Хәҙер үҙенең активист булыуы, уға тәртипле малайҙарҙы эйәртеп, кино ҡарарға ебәреүҙәрен әйтте.

Кейеме шулай ине: күлдәк аҫтында тельняшка, ябай костюм кейгәйне. Салбар балағы носкийына ҡыҫтырылған. Аяғында - ярым ботинка. Ҡайны йылда булды икән ул - асыҡ хәтерләмәйем. Шулай ҙа 1939 йыл кеүек.

*Григорий Черников.*

*1986 йылдың 23 декабре*".

Бына шулай танышылды төп информатор менән. Ләкин Ғәзнәүи яҙғандар бик ҡыҙыҡлы тойолһа ла, аңлашылмаған һорауҙар ҙа тыуҙырҙы: Ғәзнәүи, ата-әсәһе була тороп та, ни өсөн, "карауһыҙ булмағас", тип күмһей? Ул: "Мин Ирғәлин", - тип яҙа-яҙыуын, әммә ышаныслы кешеме икән?

Быға яуап итеп, Фуат Әсәҙуллин түбәндәгене хәбәр итте: "Ғәзнәүи - элек минең күршем ине. 1926 йылда тыуған. Малай саҡта бергәләп балыҡ ҡармаҡларға, еләккә йөрөнөк, тырма тырматтыҡ, һуҡа һөрҙөк. Әммә әсәһе үгәй булыу арҡаһында, ә атаһы күберәк ситтә йөрөгәнлектән, ашау, кейенеү яғынан бик ҡағылды-һуғылды. Шуға күрә, ауылды ташлап китеп йөрөнө.

1952 йылдың августында ул тағы ауылға ҡайтты, русса таҙа һөйләшеп (башҡортса белмәй ине инде), мин хәҙер Ирғәлин түгел, ә Черников тип, паспортын сығарып күрһәтте. Мин фронтовик булһам да (миңә ул ваҡытта - 27 йәш), Ирғәлин-Черниковтан шөрләп тә ҡуям, сөнки ҡыланышы, һөйләгән һүҙҙәре оҡшаманы. Шуғалыр ҙа инде, уның, Александр Матросов беҙҙең ауылдың егете, тигән һүҙенә ҡолаҡ һалмағайным. Шулай йылдар үтә торҙо. Һуңынан һуғышта ҡатнашҡандар хәҙергенә башлағас ҡына, туҡта, берәй нимә сығарып булмаҫмы икән, тигән уй тыуҙы".

Журналистарҙан инәлеп ярҙам һорау кеүек күренде был хат. Тимәк, көстән килгәнсә эҙләнеп ҡарарға һәм иң тәүҙә Ҡунаҡбайҙың үҙенә барып ҡайтырға кәрәк. Ел ҡыуып, юкты-бушҡа ауҙарып йөрөү булмаһа. Ә бәлки, иң тәүҙә матбуғат аша уҡыусыларға мөрәжәғәт итеп ҡарарға кәрәктер?

(Дауамы. Башы 9-сы һанда).

КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...

## ...ҒАИЛӘҺЕНӘ, БАЛАЛАРЫНА



Хәҙер ҡатын-ҡыҙҙарҙың бик аҙы ғына аңлы рәүештә үҙен ғаиләһенә, иренә һәм балаларына бағышлай. Ни өсөндөр, бөгөнгө йәмғиәт эшләп йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙы өҫтөнөрәк ҡуя, ә өй хужабикәләрен тормошта бер ниндәй уңышҡа өлгәшмәгәндәр рәтенә индерә. Был, минеңсә, төптә хата фекер. Элек-электән ир-егеттәр өсөн социаль өлкәлә үҙен табыу һәм уңышҡа өлгәшеү тәүбүрыс булһа, ҡатын-ҡыҙ язмышы шәхси өлкәгә күберәк бәйләнгән. Был хәҡиҡәтте инҡар итергә тырышыу һәйбәт һөҙөмтәләргә килтермәйәсәк, минеңсә. Тәбиғәткә ҡаршы барып булмай ул.

Мин өс бала әсәһе. Улдарым мәктәп йәшендә, ә бәләкәс ҡыҙым балалар баҡсаһына йөрөй. Тормош иптәшем дәүләт ойошмаларының береһендә эшләй, ә мин әлеге ваҡытта өй хужабикәһе. Декрет ялынан һуң аңлы рәүештә эшкә сыҡмайынса, үҙемдә ғаиләмә, иремә һәм балаларыма бағышларға ҡарар иттем. Был аҙымымды хуплаусылар ҙа, кире ҡағыусылар ҙа булды. Ләкин ваҡыт үткән һайын, мин үҙемдең дөрөҫ юл һайлағаныма инана барам. Элек эшкә бүлгән энергиямды хәҙер мин иремә, балаларыма йүнәлтәм, ваҡытымдың күп өлөшөн улар менән үҙғарам. Әйтергә кәрәк, был үҙ емештәрен бирмәй ҡалманы, сөнки хәҙер ғаиләлә мәңге бер нәмәгә өлгөрмәгән һәм шул сәбәпле йыш ҡына асыулы йөрөгән эшлекле ханым урынына иртән көләп оҙатып ҡалыусы, кисен йылылыҡ бөркөп торған өйҙә ҡаршы алыусы, тәрләндереп ашарға әҙерләүсе, иренә аңлаусан ҡатын, ә балаларына яғымлы һәм иғтибарлы әсәй барлыҡҡа килде. Ошо урында күптәрҙең күҙ алдына мәңге кухня бүлмәһенән сыҡмаған, көн һайын кер йыуған һәм өй йыйыштырған, үҙенә бөтөнләй ҡул һелтәп ҡараған ҡатын образы баҫыуына иманым камил. Ләкин ошо уҡ бурыстарҙы эшләп йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙар ҙа башҡара һәм берәү ҙә уларҙы донъянан артта ҡалғандар рәтенә индермәй. Үҙ-үҙен хөрмәт иткән ҡатын-ҡыҙ, кеше араһында булһынмы ул йәки бер кемгә күренмәйенсә өйҙә генә ултырһынмы, һәр ваҡыт үҙенең төҫ-башына иғтибарлы була. Ни өсөн мин коллегаларым алдында камил булып күренеү өсөн тырышырға, ә ирем һәм балаларым ҡаршыһында ниндәй йөҙ һәм ҡиәфәттә булыуыма ҡул һелтәп ҡарарға тейешмен? Мине бөхетле иткән ғаиләм өсөн тырышырға тейешмен тәү ситатта.

Үҙемдә тик ғаиләмә генә бағышларға ҡарар итеүем өсөн бер тапҡыр ҙа үкенгәнем булманы. Әгәр ҙә был аҙымым ғаиләбеҙҙе тағы ла нығыраҡ берләштереүен һәм яҡынайтыуын белгән булһам, күптән үк бары тик ҡатын һәм әсәй булып ҡына "эшләр" инем. Тормошта улар иң ҙур вазифалар.

**Нәзифә МОСТАФИНА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҒОРУР САЯЛЫҒЫҒЫҘ ҺОҠЛАНДЫРА

Беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ғорур саялығы мине һәр ваҡыт хайран итә. Улар бер ваҡытта ла үҙҙәренең кешелек дәрәжәһен кәмһетеүгә юл ҡуймай. Һәм ошо беҙ һоҡланған сифат уға ҡайһы саҡта зыян итеп тә ҡуя. Әлеге шул ғаилә хәлдәрендә тием инде. Ләкин бының өсөн ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ғәйепләргә телем әйләнмәй. Мин ирҙәребеҙҙе ғәйепләйем. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың йәнен аңламайһығыҙ һеҙ, егеттәр, уларҙың шул матур сифаттарын баһалай белмәйһегеҙ!

Әгәр ҙә, Хоҙай Тәғәлә ир менән ҡатынды бер бөтөн итеп яратҡан, тиғән риүәйәткә ышанһаң, моғайын, ул ир менән ҡатын бер рухтағы, бер милләттәге кешеләр булырға тейештәр. Шуға ышанғанмын һәм ҡатнаш никахтарҙы ҡабул итә алмайым. Шуға ла: "Нинә башҡа милләт ҡыҙына өйләндең, үҙебеҙҙең ҡыҙҙар бөткәнме ни?" - тигән һүҙҙәрҙе йыш әйтергә тура килә аҫыл егеттәребеҙгә. "Башҡорт ҡыҙҙары эргәнәнә яҡын килеп буламы ни, ғорурҙар, тәкәбберҙәр..." тигән яуап ишетәһең. Аҡланыу ғына бит был, ана шул ғорур ҡаяны яулап алырлыҡ саялығығыҙ, ихтыяр көсөгөҙ, түҙемлегегеҙ юҡлығын йәшереү генә. Ләкин бынан һеҙ отмаҫығыҙ, отолдоғоҙ. Ошо ҡылығығыҙ менән һеҙ тоғро тормош юлдашынан, рухташығыҙҙан яҙҙығыҙ...

Беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иң ҙур "етешһеҙлеге" шул: донъя ауырлығын үҙ иңенә алып өйрәнгән улар. Ҡатын булып, наҙланып ҡына йәшәй белмәй, ире өсөн дә әсәйгә әйләнә. Балалары менән бергә ирен дә тәрбиәләй, ҡурсалай, барыһын да йүнләй, таба. Шуға ла ирҙәребеҙ тормоштағы бар бурысын беҙҙең иңдәребеҙгә ауҙара, ҡатын елкәһендә йәшәүсегә әйләнә. Шул уҡ ир-аттарыбыҙ башҡа милләт ҡыҙына өйләнһә, улай итмәй бит. Бик күп егәрле, эшлекле башҡорт ирҙәрен беләм, уларҙы татар йә мәрйә ҡатындары шундай итеп үҙгәртеп, үҙҙәренә яраҡлаштырып алған. Афарин ундай ҡатынҡыҙҙарға! Башҡа милләт ҡатын-ҡыҙҙарынан өлгө алырға кәрәк был йәһәттән. Ләкин мин үҙем улай итә алманым...

# НИНДӘЙ УЛ БАШҠОРТ ҠЫҘЫ?

Мәскәүҙә йәшәүсе бер милләттәш шундай һорау бирҙе:

-Башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы бармы, ул ниндәй?

Икенсе милләт ҡыҙына өйләнеп, байтаҡ йылдар Мәскәүҙә йәшәп, икенсе милләт балаларын ишәйтеп ятҡан егеттәребеҙҙең береһе ине ул. Ахры, аҡылына килә, уйлана башлаған был, үҙенекенә тартылыу ошо һорауҙы тыуҙырғандыр, тигән ҡарарға килдем һәм:

-Бар, әлбиттә! - тип ғорур яуап ҡайтарҙым.

- Ә нинә мин уларҙы башҡаларҙан айыра алмайым? "Нинә кейәүгә сыҡмай йөрөйһөң?" тим бәрәүһенә. "Минә тиң ир тыумаған әле!" тип кенә эре сирттерҙе. Ошомо башҡорт ҡатын-ҡыҙы образы? Ир-егеттәрҙе һанға һуҡмаған, ирҙәрҙән алда хәбәр һөйләгән, ирҙәрҙең ирлеген һанламағандар башҡорт ҡатын-ҡыҙы буламы? Хәҙер бит күберәк шундайҙарҙы ғына осратаһың...

Мин милләттәш ир менән бәхәсләшергә итеп, бернисә һүҙ әйтеп өлгөрҙөм, әммә ул минең ауыҙҙы ябыр шундай дәлил килтерҙе:

-Илленән уҙғас, икенсе милләттән булған ҡатыным менән талаш-тартыш йышайҙы. "Башҡорт ҡыҙҙарына етмәй инде!" тип ысҡындырғанмын бер талаш ваҡытында. Ҡатыным өйгә бер башҡорт әхиртән алып ҡайта башланы. Бергәләп эсәләр, һүгенәләр былар, саманан сығып шашыналар. Аҙаҡ ҡатыным: "Башҡорт ҡатындарын минән яҡшыраҡ тип уйлай инең, күрҙеңме инде?"- тине. Шулай рәхәтләнеп үс алды минән...

Ысынлап та, беҙме был?..

# ТӘРБИӘЛӘЙ БЕЛМӘҮ ЭҘЕМТӘҺЕ

Бер танышым осраны ла, ҡыҙына зарлана: "Гел генә башҡа милләт егеттәре менән дуҫлаша, эргә-тирәһендә бер башҡорт егете юҡ", - ти. "Ә нинә бығa юл ҡуйһың, нинә башына төймәйһең", - тим. "Йәштәр беҙҙе тыңлаймы ни?"- ти был.

Йыш ҡына беҙ үҙебеҙҙең бала тәрбиәләүҙәге хаталарыбыҙҙы бына шулайыраҡ тип аҡлап ҡуябыҙ шул. Йәштәр тыңламаҫҡа мөмкин ул. Мәҫәлән, компьютер артында оҙаҡ ултырма, телефондан оҙаҡ һөйләшмә, тип тыйғанда, башҡа ҡайһы бер көнкүреш мәсьәләләрендә минең дә ҡыҙҙарым менән уртаҡ тел таба алмаған саҡтарым була. Бынһы була торған хәл. Ә бына принципиаль мәсьәләләрҙә, йәғни шул уҡ кемдәр менән дуҫлашыу, кемгә кейәүгә сығыу, ниндәй һөнәр һайлау тәңгәләндә беҙ бер төптәнбеҙ, сөнки был бурыстар уларға бала саҡтан ҡанына һеңдерелгән, башына төйөлгән...

...Бала яҙмышының ата-әсә мотлаҡ ҡыҫыла торған сетерекле мәлдәре байтаҡ. Улар беҙҙең ҡүҙҙән ысҡынырға, ул мәлдәр өсөн яуаплылыҡ бала иңенә генә һалынырға тейеш түгел. Баланың тормош иптәше һайлауы - шул яуаплылыҡтың иң ҙуры икәнен онотмайыҡ. Ә инде һәр кемдең үҙ милләте егете йә ҡыҙы менән ғаилә ҡорорға тейешлеген иһә мин йә һин уйлап сығармаған, ә Хоҙай Тәғәлә үҙе шулай тип яҙған яҙмышыбыҙға...

# ҠАРТЛЫҠҠА ҠАРШЫ ТОРОП БУЛМАЙ...

Гел мауығыуҙар менән йәшәй кеше. Тәүҙә әхирәтенән башҡа йәшәй алмайһың, шунан һөйгәнем, тип, егет кеше менән мауығаһың. Беҙҙең заманда китаптар ҙа төп иғтибар үҙәгендә була торғайны, шунан телевизор, шунан кеҫә телефоны, шунан компьютер. Гел мауығыу менән йәшәй кеше. Ҡыҙыҡ. Әле бына илленән уҙғас, был мауығыуҙар кәмей төшкән. Бары тик эш менән генә мауығыу ҡалған. Тағы.. матур кейем. Тағы йәшәрергә ынтылыу, шуның төрлө саралары. Әммә нисек кенә тырышма, йәшәреү сараларының тәьҫире оҙаҡҡа бармаясаҡ икәнен дә тора-бара аңлайһың.

Ошо көндәрҙә Алла Пугачева алтмыш дүрт йәше уңайы менән матбуғат конференцияһы үткәрҙе. Уның күп ҡылыҡтарын ҡабул итеп булмай. Ғөмүмән, уны яратып та, нәфрәтләнеп тә булмай, уның менән һоҡланып ҡына була. Бәхетле булырға ынтыла. Тормоштан барыһын да алып ҡалырға тырыша. Моғайын, бының өсөн ул аҡса, ниндәйҙер власты файҙаланалыр. Әммә... Журналистар Максим Галкин тураһында һорау бирмәй булдыра алманы. Алла Максимды маҡтаны ла, тәрән һағыш менән "Әммә беҙ ҡартаябыҙ, йәл шуныһы ..." тип ҡуйҙы.

Эйе, хатта ҡартлыҡ менән килешеү төҙөй алған, ҡыҫҡа күлдәк кейеп, ҡайһы саҡта кемдәрҙеңдер юлын ҡыйып, шуны бар ғәм халыҡтан да йәшерә алмай, иркен һәм ирекле ҡыланған Алла Пугачева ла ҡартлыҡ алдында бер кем дә ҡаршы тора алмаясағын аңлай...

# ҠЫҘ БАЛАНЫ ҠЫРҠ УРЫНДАН ТЫЙ...

"Ҡыҙҙарыңдың тәрбиәһенең сере ниҙә?" тип һоранылар бер осрашыуҙа. "Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан тый", тигән халыҡ мәҡәле бар. Әсәйем дә үҙемде ошо ҡағиҙәгә ярашлы тәрбиәләне. Мин үҙем дә ҡаты тотам ҡыҙҙарымды", тип яуапланым яуаплауға. Хәйер... Һәр тәрбиәнең нигеҙе балаға юғары талап ҡуйыуҙан ҡоролалыр ул. Ҡыҙҙарыма бәләкәй саҡтан юғары талап, юғары маҡсат ҡуйылды. Улар шул талапҡа яуап бирергә ынтыла. Ә бының өсөн һинең үҙеңдә лә яуаплылыҡ тойғоһо көслө булырға тейеш. Һәр көнөң, һәр аҙымың, һәр әйткән һүҙең, һәр эшең өсөн яуаплылыҡ тойғоһо...

Ошо көндәрҙә Өфөлә ике башҡорт ҡыҙының үлтерелеү хәбәре таралды. Төрлө һөрауҙар, имеш-мимештәр йөрөй уларҙың үлеме хаҡында. Кемдәрҙер ҡыҙҙарҙың үҙҙәрен ғәйепләй. Кемдәрҙер ҡыҙҙарҙың тәртипле булыуын, хатта берәүһенең намаҙға баҫырға әҙерләнеп йөрөүен раҫлай. Һәр хәлдә, ошо икенсе фаразға бик тә ышанғы килә...

Ошо урында беҙҙең әсәйҙәребеҙ тәрбиәһен, "Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан тый" тигән мәҡәлдең асылын тағы ла бер тапҡыр ҡыҙ балаларыбыҙ иғтибарына йүнәлтке килә. Эйе, беҙҙе әсәйҙәр ҡаты тотто. Аҙаҡтан, әсәйҙәрҙән айырылып, баш ҡалаға килеп, үҙ аллы йәшәй башлағас, ул тыйыуҙар һәр аҙымда иҫкәртеп торҙо беҙҙе. Иртән уҡыу йортона йүнәләһең икән, тырышып белем алыуҙан алып, үҙ-үҙеңде әҙәпле тотоу, иғтибарлы булыу, уҡытыусыларыңды хөрмәт итеүгә тиклем - бар әҙәп-тәртип ҡағиҙәләрен үтәргә тейешһең. Был хаҡта әсәйҙәр өгөтө иҫкәртеп тора. Кисен ҡайҙалыр урамға сығаһың икән, мотлаҡ эт-ҡоштан, насар кешеләрҙән һаҡланыу сараларын күрергә, алдыңды, артыңды ҡарап йөрөргә тейешһең - быныһы ла тыйыуҙар менән ҡаныбыҙға һеңгән. Ул тыйыуҙар әле булһа, ҡартлыҡ ҡорона инеп барғанда ла беҙҙең менән. Ғүмер буйы оҙата килә улар.

Ә баяғы ҡыҙҙарға шундай тыйыуҙар һеңдерелмәнеме икән ни, тип әсенеп уйланыла... Эйе, "Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан тый", тигәнде бер генә әсә лә онотмаҫҡа тейеш. Ҡыҙ балағыҙ бәхетле, имен, һау-сәләмәт булһын, тормош юлында йүнле ир һайлаһын тиһәгеҙ, ошо халыҡ мәҡәлен ҡулланығыҙ тәрбиәлә. Бер нигә ҡарамай, ҡырҡ урындан тыйығыҙ ҡыҙ балағыҙҙы...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...

# ...ХЕҘМӘТЕНӘ



**Был һүҙҙәрҙе күптәр хаҡында әйтергә мөмкин, әммә уның менән таныш булыусыларҙың күҙ алдына, тәү сиратта, тап Луиза Сәмситова килеп баҫа. Ысынлап та, уның бар ғүмере телебеҙгә, илебеҙгә, халҡыбыҙға хеҙмәт итеүҙән ғибәрәт.**

Мәктәп директоры ғаиләһендә үҫкән ҡыҙ балаға үҙ-үҙенә талапсанлыҡ, эшһөйәрлек тәрбиә аша бирелә һәм был сифаттар уға бөгөн дә тырышып эшләргә ярҙам итә: 4 йәшенән атаһы Хәмзә ағай спортҡа ылыҡтырһа, инәһе Миңлегөл апай уҡыуға, фәнгә һөйөү тәрбиәләй. Тырыш, ныҡышмал, маҡсатҡа өлгәшеүсән булыуының һөҙөмтәһе лә оҙаҡ көттөрмәй: Башҡорт дәүләт университетын Ҡыҙыл дипломға тамамлай, ваҡытынан алда кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай ул.

2000 йылда М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында хеҙмәт юлын башлаған ғалимә эште ваҡ һәм эрегә бүлмәй, уның өсөн барыһы ла еренә еткереп эшләнергә тейеш. Ошо ваҡыт араһығы эсендә Луиза Хәмзә ҡыҙы хеҙмәт юлының барлыҡ баҫҡыстары аша үтеп, өлкән уҡытыусынан алып декан вазифаһына тиклем үрләй. Әммә бер ваҡытта ла ултырғысына йәбешеп, кабинет хеҙмәткәре булып ултырмай. Факультет студенттары ҡайҙа ғына сығып һамаһын, ниндәй генә сараларҙа ҡатнашмаһын - ул һәр саҡ улар менән. Балаларын яҡлаған ҡарсығалай, һәр береһен ҡурсалап, һәр береһен дәртләндереп эргәләрендә йөрөй.

Бөгөн Луиза Сәмситова 130-ҙан ашыу ғилми-методик хеҙмәт авторы. Ул Башҡортостанда ғына түгел, сит илдәрҙә лә сығыш яһай, мәҡәләләр баҫтыра. Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференциялар ойоштора һәм үҙе лә ҡатнаша. Сөнки күңел түрендә башҡорт фәнен донъя кимәленә күтәреү маҡсатын йөрөтә. Йыл һайын Рәсәй гуманитар ғилми фондының грантына лайыҡ булған ғалимә аспиранттары һәм студенттарына ла талапсан һәм уларҙан да тырышлыҡ талап итә, сөнки фәнгә һөйөү студент йылдарынан башланырға тейеш тигәнгә ныҡлы инанған ул.

Студенттарға Луиза Хәмзә ҡыҙы ҡушма һөйләм синтаксисынан белем бирә. "Ҡушма һөйләм синтаксисын белеү өсөн студент башта морфология, ябай һөйләм нигеҙҙәрен яҡшы үҙләштерергә тейеш. Шул ваҡытта ғына ҡушма һөйләм серҙәренә төшөнөргә мөмкин", - тип үҙ фекере менән бүлешә талапсан уҡытыусы. Дәрестәрҙе йөкмәткеле һәм ҡыҙыҡлы үтһен өсөн бар тырышлығын һала, сөнки студенттың дәрескә йөрөү-йөрөмәүе күп осраҡта уҡытыусыға ла бәйле.

Шул уҡ ваҡытта һәр студенттың, аспиранттың, коллегаларының проблемаларын үҙенекендәй күреп, аңлап, күңеле аша үткәрә, уларҙың хәленә инә белә ул. Ғөмүмән, талапсанлыҡ менән бергә, яуаплылыҡ, кешелеклелек, кеселеклелек, ғәҙеллек, ярҙамсыллыҡ кеүек матур сифаттар хас Луиза Хәмзә ҡыҙына. Ә бит кендеге хеҙмәтенә береккәндәр өсөн был иң мөһим сифаттар.

ИНТЕРНЕТТАН



# КИҘЕҮҘӘН...

## яңы дарыу

■ Колумбия, Бата университеттарының һәм CSIRO тикшеренеү ойошмаһының бер төркөм ғалимдары киҙеү вирусына ҡаршы көрәшеүҙә яңы асыш яһаған. MedikForum яҙыуынса, улар киҙеүҙең бөтөн штаммдарына тәьҫир итеүсе яңы дарыу препараты тәҡдим иткән. Әлегә тиклем дарыуҙар киҙеүҙең тиҙ генә башҡа форма алған штаммдарына ҡаршы көрәшә алмай ине. Ғалимдар әле тап ошо етешһеҙлек өҫтөндә эшләгән. Улар уйлап тапҡан препарат шулай уҡ киҙеүҙең өҫкө антигенына йоғонто яһай һәм уны оҙайлы ваҡытҡа бәйләп кенә ҡалмай, вирустың "йөрәгенә" үтеп инеп, унда ныҡына. Шуға ла киҙеү штаммын үҙгәрткән осраҡта ла дарыу үҙенең тәьҫирен юғалтмаясаҡ. Яңы дарыу клиник һәм лаборатор һынауҙар үткән, әммә әлегә тестар дауам итә. Әгәр ҙә улар уңышлы булһа, ул 6-7 йылдан дарыуханаларҙа һатыла башлаясаҡ.

■ Валенсия университеты ғалимдары сабый илауының тотош классификацияһын төҙөгән. Баланың нимәгә илауын аңлау өсөн уның йөҙөнә ҡарау ҙа етә, тип яҙа "МедВести". Тикшеренеүҙәрҙең авторы доктор Мариано Холиз иҫәпләүенсә, илау - бала өсөн үҙенең негатив эмоцияларын күрһәтеүҙең берҙән-бер юлы. Уның йөҙөндәге мимикаға ҡарап, яҡынса илауҙың сәбәбен аңларға мөмкин. Әгәр ҙә бала илағанда уның күҙҙәре асыҡ икән, ул йә ҡурҡҡан, йә көйгән. Күҙҙәрен йомоп илаһа, уның ҡайһылыр ере ауырта. Бынан тыш, илау тауышы ла әһәмиәтле. Үпкәләгән бала башта ҡысҡырып илай, әммә йылап тауышын баҫа бара. Ауыртыуҙан илағаны иһә, киреһенсә, тыныс ҡына илай башлап, оҙаҡ итеп ҡысҡырып иласаҡ. Ҡурҡҡан осраҡта ла оҡшаш хәл буласаҡ. Психологтар раҫлауынса, эскә йомолған кире тойғолар, ҡайғылар, үпкәләүҙәр физик сәләмәтлек өсөн зыянлы. Шуға ла улар оло-ларға ла илап алырға кәңәш итә. Табиптар белдереүенсә, иламай сыҙап йөрөү үлем хәүефен тыуҙыра, шуға ла ирҙәрҙең ҡатындарға ҡарағанда уртаса 7 йылға əҙерәк йәшәүендә ошо сәбәп ятыуы ихтимал, ти улар.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урын биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Американың Йөмәгәт сәләмәтлегә ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ була. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үҫмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үҫмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Хәҡиҡәт сағыштырғанда асыла, тигәндәре хаҡтыр. Юҡһа, күптәр замандың ауырлығына, тормоштоң түҙеп торғоһоҙ булыуына зарлана. Ә бынан бер быуат, ярты быуат элек беҙҙең атай-олатайҙар, әсәй-өләсәйҙәр нисек йәшәгән икән һуң? Хәҙерге тормошто хатта үткән быуаттың 90-сы йылдары менән дә сағыштырырлыҡ түгел. Шөкөр итә беләйек, тип түбәндәге хәтирә-яҙманы һәм бәйетте тәҡдим итәбеҙ.**

# ЯҘМЫШ ӘСЕҺЕН...

## күтәрешеүселәр осрап торҙо



Оло юлдан бер аҙ ситтәрәк, күкһелләнеп ятҡан Ирәндек тауҙарының ҡуйынына һыйынып, боронғо Ғәле ауылы урынлашҡан. Ҡарағайҙан, уҫаҡтан һалынған өйҙәр араһында самандан һуғылғаны ла, ҡәҫтән һалынғаны ла күренгеләп ҡала. Ауылдың иң осонда, тау һыртында, урманға терәлеп тигәндәй ултырған өйҙә Миңзада инәйем менән Хөснулла олатайым йәшәй. Батыр ағайым менән мин бында әллә ҡасандан йәшәйбеҙ һымаҡ. Атайымды бөтөнләй хәтерләмәйем. Уны алып киткәндә минә бер йәш тә тулмаған булған. Һаҡсылар килгәс, атайым мине күтәреп, ҡосаҡлап һөйгән дә, беҙҙә фатирҙа торған Һиҙиәт ағай Ҡусәбаевҡа тоттороп киткән. Беҙ ул ваҡытта Баймаҡта Хоҙайбирҙин урамында йәшәгәнбеҙ. Шунан һуң әсәйемде партия ағзалығынан сығарып, Баймаҡ торфына эшкә ебәргәндәр. Торфта беҙ ситәндән үрелгән оҙон бараҡтың ситке бүлмәһендә йәшәнек. Шул күҙ алдымда: ныҡ ауырып ятам. Әсәйем мине ҡосаҡлаған килеш сәсемдән һыйпай. Ниңәләр, күҙҙәре йәшләнә. Бына ул мине ҡыҫып һөйҙө лә, урыныма, йәнәшә ҡуйылған ике артһыҙ ултырғысҡа һалды. Баҡта юрған менән ябып, ике яғынан ҡымтып та ҡуйҙы. Мейес өҫтөнә, ҡайнай торһон, тип, сәйнүк ултыртты. Еҙ тас менән тыштан һалам ҡушылған һары балсыҡ индерҙе. Бер аҙ йылымыс һыу ҡойоп, балсығын иҙҙе. Үрелгән ситән аша күренеп торған ярыҡ-йырыҡто, сатналған ерҙәрен һылап сыҡты. Тасын таҙалап, ҡулын йыуып инде. Минән таҫтамал алып биреүемде һорап өндәште. Ләкин мин аяҡҡа баҫырлыҡ хәлдә түгел инем шул. Бына әсәйем ҡапыл бер ҡулы менән башын тотто. Икенсеһе менән тотонорға таяныс эҙләне. Ҡулы тик һалҡын бушлыҡты ярып төштө. Күкрәгенән әрнеү ҡатыш "аһ" тигән тауыш сыҡты. Кәүҙәһе барак иҙәненә һығылып төштө. Барыһын да үҙ күҙҙәрем менән күреп яттым, ләкин бер ни ҙә аңламаным. "Әсәй, әсәй", тип өндәшеп тә ҡараным. Тик ул яуап бирмәне, янымала килмәне. Шул ваҡыт ишек асылғаны ишетелде. Башымды саҡ-саҡ бороп, бүлмәгә ингән Батыр ағайымды күрҙем. Ул иҙән уртаһында хәрәкәтһеҙ ятҡан әсәйебеҙ янына йүгереп килде. "Әсәй, әсәй, тор..." тип, әсәйҙең ҡулынан һөйрәне. Ни булғанын аңлағандай, "Әсәй!", тип ҡысҡырып илап йүгереп сығып китте. Бер аҙҙан кешеләр килде. Әсәйҙе алып сығып киттеләр. Мин бер үҙем ятып ҡалдым. Шул ваҡытта әсәйҙе тапырып илағанымды хәтерләйем.

Әсәйемде ҡайҙа ерләгәндәрен дә белмәйем. Фамилияһы Татлыбаева, исеме Минсара ине. Етем ҡалғас, беҙ әсәйемдең Ғәле ауылындағы апаһы Миңзада инәйем менән Хөснулла олатайымдарҙа йәшәй башланыҡ. Таулыҡайҙа, Татлыбайҙа туғандарыбыҙ булһа ла, беҙҙе, ниңәлер, Миңзада инәйемдәр алған. Шулай Ҡурғаҙа йылғаһының һыуын эсеп, Ирәндек тауҙары һыртында еләк, әтнәкәс, һарына ашап, шау-гөр килеп үҫтек. Ҡәҫтән һалынған өйҙә, ниндәй генә һыуыҡтарҙа ла һәр саҡ йылы булды. Уртала ҙур мейес, уның янында ҙур урындыҡ торғанын хәтерләйем.

Бала саҡта ла тәбиғәт беҙҙе һынай торғайны. Кемдеңдер сыҙамлығын, кемдеңдер кешелек сифаттарын, тигәндәй. Миңзада инәйемдәрҙә йәшәгән саҡ. Һалҡын ҡыштың бер кисе. Өйҙә балаларҙан башҡа берәү ҙә юҡ. Малайҙар шау-гөр килеп шаяра, этешә-төртешә. Мин дә араларында йөрөйөм. Уйын араһында малайҙарға оҡшамаған берәй һүҙ әйттемме икән, тегеләр мине етәртеп, ялан аяҡ килеш урамға этеп сығарҙылар ҙа, артымса ишекте келәгә элделәр. Бар көскә ишекте тартып ҡарайым. Юҡ, асылмай. "Батыр ағай!" тип, урам яғына ҡарап ҡысҡырам. Төшкөһөн олатай менән урманға киткән ағайым ҡайҙан ғына ишетһен инде мине. Илағым килһә лә, ирендәремде ҡымтып, ҡанатҡансы тешләнем, ләкин иламаным. Күңелдә бер юлы әллә күпме һорауҙар тыуҙы. Тик тирә-яҡты ҡаплаған ҡараңғы шомлоҡ аптыраңҡырап, тағы ла ныҡыраҡ тынып ҡалғандай тойолдо. Һин дә бик ныҡ шаулама, тигәндәй ине ул. Ҡапыл туңған тәҙрәне күреп ҡалдым. Өйҙәге шәм яҡтыһынан ниндәйҙер яуыз кеше йөҙө минән көлөп торған кеүек күренде. Ул мине "Әһә, һин дә тышта, һалҡында ҡалдыңмы, ә өйҙә йылы..." тип үсәгән һымаҡ. Ә мин баш ҡатырып, күп уйлап торманым. Ҡапыл ялан аяҡтарым менән ҡар аҫтындағы ат тиҙәген ҡупшытып тибеп алдым да, йән асыуым менән тәҙрәләге шул яуыз йөҙгә ташланым. Селпәрәмә килеп ярылған тәҙрә тауышы ғына иҫемә килтерҙе. Ул тауыш төнгө урамды тултырып, ҡыйыҡ баштарынан аша осоп сығып, тирә-яҡтағы ҡоштарҙы тертләтеп яңғыраны. Ә Ирәндек һыртынан әйләнеп килгән тауыш мине хуплай кеүек ине.

Шул ваҡыт мин тәү тапҡыр үҙ-үҙемде яҡларға кәрәклеген аңланым, шикелле. Тиҙ арала иҫемә килеп, бәләнән ҡотолоу юлын эҙләй башланым. Уҡытыусы Фатима апай иҫкә төштө. Ул шул тиклем матур. Дөм-ҡара сәстәре биленән аҫҡа төшөп тора. Ә ҡаштары, керпектәре! Әкиәттәге хан ҡыҙҙары ғына шундай матур булалыр. Әле генә ап-аҡ ҡар өҫтөндә, еңел генә ҡулдәктә, бер үҙем япа-яңғыҙ ни эшләргә белмәй тора инем. Хәҙер инде ни эшләргә кәрәклеген беләм. Күңелдә шатлыҡ, өмөт уянды. Бер аҙҙан инде ап-аҡ ҡар өҫтөнән яланаяҡ, ҡар бураны туҙҙырып, ауыл осонда йылмайып яҡтырып торған тәҙрә уты яғына ҡарай йүгерә инем. Һис кенә лә тиҙлекте кәметмәйенсә, атылып барып ишек тотҡаһына йәбештем. Ул бер тартыуҙа асылды. Апай китап уҡып ултырған ерҙән башын ҡалҡытып ҡараны. Уға бер ни ҙә өндәшмәйенсә, туп-тура урындыҡ аҫтына инеп боҫтом. Шәп йүгереп килеп ҡапып туктауҙанмы, йөрәгем ярһып тибә ине. Бер аҙҙан Миңзада инәйем мине эҙләп килеп сыҡҡан. Апайҙың "Ҡуй, борсома үҙен. Ҡалһын миндә. Иртәгә ҡайтыр әле", тигән һүҙҙәрен йоҡо аралаш ҡына ишеткәндәй булдым.

Беҙҙең быуын ниндәй генә ауырлыҡ күрмәне, ә барыбер еңеп сыҡтыҡ. Сөнки беҙҙә ышаныс көслө ине. Бөгөнгөләй хәтеремдә, Миңзада инәйем урындыҡта ятҡан балаҫтың берәй биҙәген усы менән һыйпай ҙа, уға бик оҙаҡ итеп ҡарап ултыра. "Бына, ҡара әле. Был нимәгә оҡшаған?" тип минә өндәшә. Ҡайһы бер саҡ яуабымды ла көтөп тормайынса, күңелендә киләсәк тормош тураһында булған уйҙарын хыялланып китеп һөйләр ине. Шуның араһында "Һин затлы ырыуҙанһың, әсәйең Ырғыҙ буйында тыуып үҫкән, бөрйән ырыуынан. Шуны хәтереңдән сығарма", ти торғайны. Шулай, бер ваҡыт шым ғына атайым тураһында ла әйтте: "Ғиззәт кейәү уҡымышлы кеше булды. Ана, йот йылында Таш ауылында, Муллаҡайҙа үкһеҙ етем ҡалған балаларҙы йыйып, приют асты. Шуның арҡаһында ул заманда күпме бала үлемдән тороп ҡалды. Тәүге осорҙа балалар ҡасып маташһалар ҙа, һуңынан өйрәнеп киттеләр. Бер каммуна булып йәшәнек. Хәҙер ул Темәс балалар йортона әйләнгән инде", ти торғайны. Шәйехзада Бабич менән дә бик дуҫ булған икән. Тик уныһын йәшләй генә әрәм итеп ҡуйғандар шул. "Бигерәк кеше күңелле була торғайны. Йылайырҙа ерләп ҡайтҡандан һуң да, Темәстә бер килке уны осратырмын һымаҡ була торғайны", тип тә хәтерләй торғайны атайын.

Бер заман ҡышҡы һалҡын көндәр ҙә бер аҙ йомшара бирер, иҙ һулышы тананға бөркөр. Шундай көндәрҙең береһендә Хөснулла олатай Миңзада инәйемә беҙҙе юлға әҙерләргә ҡушты. Икенсе көн ҡояш ҡалҡҡас та юлға сығырға, тип һөйләштеләр. Егелгән ат санаһына мул ғына итеп бесән һалынды. Мине ҙур ғына толопҡа урап ултырттылар.Толоп ысҡынып китмәһен өсөн билбаулап та ҡуйҙылар. Батыр ағайым менән мине оҙатырға тип, күрше апай-ағайҙар килгәйне. Ҡояш батҡансы беҙ Ирәндек тауының теге яғына барып етергә тейешбеҙ. Беҙ күп балалар араһына йәшәргә барабыҙ икәнен аңланым. Унда уйынсыҡтар ҙа күп, беҙҙе яҙырға, уҡырға өйрәтәсәктәр, тип әйттеләр.

Яҙмыш тигәндәре ҡыҙыҡ икән. Ул әҙәм балаһын берсә Ирәндек тауҙарының был яғына, берсә икенсе яғына ташлай. Ҡасандыр, йот йылында, атайыбыҙ етем балалар өсөн приют асҡан. Хәҙер килеп, уның балалары үҙебеҙ шунда эләктек. Быны шундай ҙа хәлдәр була икән шул. Үҫтек инде шулай. Бер ҙә бирешмәнек.

Иртәнсәк тәсбих тартып, телә̆ктәр теләп ултырғанда, барыһы ла иҫкә төшә. Беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙы, йорт-илебеҙҙе телэһә ниндәй әптек-һәптектәрҙән, бәлә-ҡазаларҙан һаҡла инде, тип, таңдарын тәсбих тартам. Хоҙай Тәғәләнең ҡөҙрәте кин. Үҙегеҙ күреп торараһығыҙ, хәҙер донъяла ниҙәр генә юҡ. Болот ямай, бойороҡ яуҙыра, тип бушҡа әйтмәй бит халыҡ. Онотолоп киткәндәргә төрләнөн күрһәтеп ала. Шуға күрә, шөкөр итергә кәрәк. Алла бирһә, халыҡ әйтмешләй, тәбиғәт яманы китер ул...

**Фәниә ТУЛЫБАЕВА-ТАТЛЫБАЕВА.**

*КЕНДЕГЕ БЕРЕККӘН...*

# ...ТЕАТРҒА, ЙЫР-МОҢҒА



**Йыр-моң функцияһы һәм йәшәү формаһы менән көндәлек тормошобоҙға, кисерештәребеҙгә яҡын торған ижад төрө. Был борондан шулай булған, халҡыбыҙ бер ҡасан да йырһыҙ йәшәмәгән. Йыр көнөлдә елкендереп ебәргән, рухты күтәргән, һағышты баҫҡан.**

Мин композиторҙар Хөсәйен Әхмәтов, Нәбиулла Мөстәкимов, бейеүсе Рәшиҙә Туйсина һәм башҡа бик күп һәләтле сәнғәт эшмәкәрҙәренең тыуған төйәге - Баймаҡ районының Сыңғыҙ ауылында тыуғанмын. Был төбәктә йырламаған, бейемәгән бер кеше лә юҡ. Бөгөн дә халыҡ йырҙарын тыңлаһам, иң тәүҙә әләсәйем менән ҡартатайым, уларҙың радионан ағылған боронғо йырҙарҙы тыңлай-тыңлай, самауырҙарын шыжлата-шыжлата сәй эсеүҙәре күҙ алдыма килә. Атайымды, уның ҡустыларын ауылдаштарым һандуғас тауышын сығарып һыҙғыра белеүселәр, тип белә. Туғандар йыйылышһаҡ та, әйҙә, ҡош булып һайра әле, тип һорай һалалар, шул саҡта атайым һандуғас булып һыҙғырып бейей. Үҙемдең бер туған һеңлем Альбина ла моңло йырлай. Ошондай мөхиттә үҫеүем мине ғүмерлеккә халҡыбыҙҙың йырҙарына, моңона, бейеүҙәренә, театрына ғашиҡ итте һәм бөгөн мин уларһыҙ йәшәй ҙә алмайым.

Беҙ үҫкән саҡта мәктәптәрҙә үҙешмәкәр смотрҙар йыш үтә ине, был да балаларҙы сәнғәткә яҡынайтҡан икән. Алып барыусы, матур һүҙ оҫтаһы булып танылыу яулағайным шул саҡта. Һуңынан Сибай педагогия колледжында, Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда мәҙәни секторҙы етәкләргә, мәҙәни тормоштоң уртаһында ҡайнарға тура килде. Был һәләттәрем бөгөнгө эшемдә лә ярҙам итә. Башҡалар өсөн йырламаһам да, эстән үҙем гел моңланып йөрөйөм. Был яҡшы кәйефтә булырға, тормоштоң күңелһеҙ яҡтарына иғтибар итмәҫкә, һағышлы саҡтарҙы енелерәк үткәреп ебәрергә ярҙам итә. Эш көнөнән һуң мотлаҡ концерттарға, театрға йөрөйөм, әхирәттәрем, таныштарымдың тыуған көндәренә, башҡа байрамдарға билеттар бүләк итеүҙе ғәҙәткә индереп, уларҙа ла сәнғәткә һөйөү уятырға тырышам. Мәскәүҙә саҡта матур бер күренешкә иғтибар иткәйнем. Унда метронан сыҡҡан ерҙә төрлө концерт, спектаклдәргә ташлама бирә торған флайерҙарҙы күплап тараталар. Беҙҙә лә ошо юл менән тамашаларға реклама яһарға мөмкин булыр ине, был уларға тамашасыларҙы күберәк йәлеп итеү мөмкинлеге бирер ине, тип уйлайым.

**Айгөл БУРАНҒОЛОВА,**
**Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхананың бүлек етәксеһе.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## "Ваҡытты ауыҙлыҡлау" нимә ул?

"Ваҡытты ауыҙлыҡла!" Ҡайҙандыр күңел төбөндә шундай саҡырыу тыуҙы. Әгәр уны ишетмәгән булһам, тип уйлайым, барлыҡ башланғыстарым кәрәкле һөҙөмтә бирмәҫ ине, моғайын. Был сәнғәткә эйә булыусы тормош ауырлыҡтарын еңел үтә. Нимә ул "ваҡытты ауыҙлыҡлау"? Уны ҡулға эйәләштерелгән ҡырағай ат тип күҙ алдына килтерегеҙ. Моғайын, ҡырағай атты күҙәткәнегеҙ барҙыр. Бешмәгән өйрәтеүсегә ул нисек тибешә, артҡы аяҡтарына баҫа, башын болғай, хырылдай, тояғы менән тибергә маташа. Ваҡыт та, әгәр ул ҡырағай хәлдә икән, ауыҙлыҡлағанда үҙен тап ҡырағай ат кеүек тотор. Мәҫәлән, һеҙ саҡ ҡына эшкә һуңланығыҙ, ти, ә етәксегеҙ алдығыҙға тып итеп килеп баҫа. Ул һеҙҙе кеше алдында әрләргә лә мөмкин, һәм һеҙ үҙегеҙҙе яҡлап бер нәмә лә әйтә алмайһығыҙ. Йәки ул бары тик ауыҙ сите менән генә көләмһерәп ҡуйҙы йәиһә бөтөнләй һеҙҙең хатаны күрмәмешкә һалышты, ти. Әммә һеҙ белеп торағыҙ: абруйығыҙ төштө. Эшкә йәки берәй урынға һуңлау, ваҡытты ауыҙлыҡлай алмауҙың бер сағылышы һәм һеҙҙең был тормошта дәлилһеҙ булыуығыҙҙы раҫлаусы күренеш. Ваҡытты ауыҙлыҡлаусы бер ваҡытта ла бер ҡайҙа ла һуңламай. Ул һәр ваҡыт нимә менәндер мәшғүл булғанда ла уның ваҡыты һәр саҡ күп.

70 йәштә уртаса ғүмер оҙайлығы яҡынса 600 мең сәғәт тәшкил итә. Әгәр һеҙ йоҡоға ошо ваҡыттың өстән бер өлөшөн, хеҙмәткә 80 мең сәғәт самаһы ваҡытығыҙҙы бүләһегеҙ икән, белемегеҙҙе арттырыуға, ял итеүгә, баҡсала йәки йорт алдында эшләүгә 320 мең самаһы ваҡытығыҙ ҡала. Тап бына ошо 320 мең сәғәтте аҡыллы итеп бүлергә кәрәк тә инде. Ваҡытты ауыҙлыҡлаусы тормоштоң ажар дингеҙе өҫтөнән еңел генә оса. Ул иртә тора, шул уҡ ваҡытта иртә йоҡларға ята. Уға төн уртаһына тиклемге бер сәғәт йоҡо төн уртаһынан һуңғы ике сәғәткә тиң икәнлеге билдәле. Иртәнге сәғәт биштә ул йоҡонан тыныс һәм йоҡоһо туйып килеп уяна. Ә таңғы мәл - планета йәшәйешенең иң мөһим мәле: был ваҡытта алдағы көнгә бәхет тараталар. Һуң тороусыларға баш ауыртыуы һәм ҡәнәғәтһеҙлектән башҡа бер нәмә лә эләкмәй.

Ваҡытты ауыҙлыҡламаусыларҙы тормошта ҙур күңелһеҙлектәр көтә. Ваҡыт етмәүе - замана кешеһенең хроник ауырыуы. Был сир менән сирләүселәр үҙәк көйөүҙән, ашҡаҙанының аҙыҡты эшкәртмәүенән интегә. Уны йоҡоһоҙлоҡ борсой, нервылары ҡаҡшаған була. Ғаилә аңлашылмаусылыҡтары, эштәге низағтар - уның тормошоноң айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Ваҡытты ауыҙлыҡламаусыларҙы даими рәүештә йәрәхәттәр әҙәрләкәй, даими ҡурҡыу уның юлдашына әүерелә. Иң насары нимә: бындай ата-әсәнең балалары ла даими ашығып йәшәй. Йыш ҡына шулай була: улар юлды тыйылған урында аша сыға, ниндәйҙер транспортты ҡыуып тотоу өсөн йәнтәслим йүгерә. Ә был бик йыш фажиғәле эҙемтәләргә килтерә. Әгәр кеше ваҡытты ауыҙлыҡлай алмай икән, ул бер ваҡытта ла теләгәненә өлгәшмәйәсәк.

Уҙған быуаттың алыҫта ҡалған 90-сы йылдарында иттән, балыҡтан һәм йомортҡанан баш тартып, бер үк ваҡытта "ваҡытты ауыҙлыҡлай" башланым. Әлбиттә, ул ваҡытта минең өсөн бындай билдәләмә юҡ ине. Беренсе тапҡыр был һүҙбәйләнеште 2007 йылда "Практик педагогика" уҡыу әсбабы өҫтөндә эшләй башлағас ҡулландым. Яңы эш башлаған уҡытыусыларға тормош мәсьәләләрен уңышлыраҡ сисерҙәй кәңәш бирергә теләнем. Эскелек, тәмәке тартыу, ауырыҡһыныпо тороу, ғаилә тормошонан өмөт өҙөү, тормош мәғәнәһен юғалтыу - улар барыһы ла ваҡыт менән идара итә белмәүгә бәйле бер сығанаҡҡа эйә. Педагогика йәш быуынды ваҡыттың ҡәҙерен белергә, уны үҙенде камиллаштырыуға, үҙеңде асыу өсөн һөҙөмтәле файҙаланырға өйрәтеү маҡсатын алған фән. Үҙ өҫтөмдә даими эшләп, мин педагогиканың фән булараҡ шундай билдәләмәһен таптым.

Ваҡытты ауыҙлыҡлау йоҡларға ятыу ваҡытын билдәләүҙән башлана. Һәр көн 11-се яртыла мин йоҡларға яттым. Тәүҙә йоҡлап китеүе бик ауыр булды, сөнки өйҙәгеләр улай-былай йөрөй, өҫтәге ҡаттағы күршеләр ваннала йыуына, ултырғыстарын шылдыра һ.б. Иҙәндә, дүрткә бөкләнгән одеал өҫтөнә һалынған матраста йоҡланым. Ныҡ тауышланһалар, ҡолағымды мендәргә ҡаплап, һул яғыма яттым. Уң ҡолағымды, тын алырға урын ҡалдырып, одеял менән ҡапланым. Шау-шыуға иғтибар итмәҫкә тырыштым, бер кем менән дә талашманым, өйҙәгеләрҙән үҙҙәрен шымыраҡ тотоуын талап итмәнем. Сөнки донъяны үҙендең талаптарыңа һәм ҡыҙыҡһыныуҙарыңа тап килтерергә тырышыу асыуҙы ҡабартыуын, ғаиләлә бер-береңде аңламауға, талашҡа килтерәсәген белә инем. Тиҙҙән өйҙәгеләр - мине, мин уларҙы күрмәй башланыҡ. Яңы йыл алдынан күп һанлы ҡунаҡтар сәғәттең ун икене һуҡҡанын көтөп ултырғанда, мин лайыҡлы ял итеү өсөн үҙемдең бүлмәмә сығып яттым. Уның ҡарауы, таңғы биштә аяҡ өҫтө инем инде - көндәгесә йүгерергә сыҡтым.

Иванов системаһы яҡлылар уҡыған бер нисә лекцияны тыңланым һәм уның элементтарын тормошома индерә башланым. Тәҡдим ителгән ҡағиҙәләрҙе теүәл үтәргә тырышыу тормошомда ауырлыҡтар тыуҙырҙы. Тирем һыҙырыла башланы, башым ҡауаҡ менән ҡапланды. Шунда үҙем өсөн бер һығымта яһаным: бер генә система ла автор билдәләгәнсә ҡулланыла алмай. Иванов ысулын ҡулланыусылар, бәлки, көнөнә ике тапҡыр һыуыҡ һыу менән ҡойоноуға сыҙайҙыр. Сөнки улар ит һәм башҡа продукттар ҡулланыуҙан баш тартмай. Минең тәнем бындай һынауға сыҙаманы. Шуға күрә иртән бер генә тапҡыр ҡойоноуға күстем. Тәндө ҡоротторға ярамай, тигән кәңәштән дә баш тарттым: яҡшы итеп һөртөндөм, кейендем һәм иртәнге аш әҙерләргә тотондом.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

75. Тормош иптәшен һайлағанда был һеҙҙең тормошоғоҙҙағы иң мөһим ҡарар икәнлеген иҫегеҙҙә тотоғоҙ. Ғаилә мөнәсәбәттәре беҙгә 90 процент хуплауҙы, бәхетте һәм ҡаҙаныштарҙы бирә, шуға күрә уны ҡорғанда барлыҡ тормош аҡылын эшкә егергә кәрәк. Бәйләлек, юмор хисе, зыялылыҡ, бөтөнләк һәм натураның өлгөргәнлеге, темперамент, тап килеү һәм характерҙың үҙенсәлектәрен билдәләүсе химик реакция кеүек төшөнсәләрҙе өйрәнегеҙ. Әгәр уларҙың барыһы ла һеҙҙе ҡәнәғәтләндерә икән, никахығыҙҙың уңышлы булырына өмөт бар. Үҙ ҡарарығыҙға ашыҡмай ғына барығыҙ һәм берәүгә лә һеҙҙе ашығыс ҡарарға килеүгә мәжбүр итергә юл ҡуймағыҙ.

76. Бер ҡасан да бер кем менән дә шәхси үҫешегеҙ самаһы буйынса фекер алышмағыҙ. Аҡылығыҙҙы үҫтереү һәм рухығыҙҙы нығытыу стратегияғыҙ - һеҙҙең "ноу хау". Башҡалар үҙ өҫтөндә эшләүҙең әһәмиәтен аңламауы ла мөмкин, ул ғына ла түгел, һеҙҙең уңышығыҙҙың күләмен, һеҙҙе махсус ысулдар ҡулланыуҙа ғәйепләп, түбәнәйтергә, кәмһетергә лә тырышасаҡтар. Шуға күрә үҙегеҙҙе үҫтереү буйынса саралар башҡалар өсөн сер булып ҡалһын.

77. Бер аҙналыҡ эш графигына көсөргәнештән арыныу өсөн ваҡыт билдәләгеҙ һәм уны һис тайпылышһыҙ үтәгеҙ. Әгәр расписаниеғыҙға етәксегеҙ йәки перспективалы клиент менән осрашыуҙы индерә алмаһағыҙ, нилектән үҙегеҙҙең перспективағыҙ өсөн һалынған ваҡыт капиталын ҡорбан итергә тейешһегеҙ? Һеҙҙең уйланыу, башығыҙҙы бушатыу һәм батареяларҙың зарядын бөтөрөү өсөн ваҡытығыҙ булырға тейеш. Барлыҡ ошо процедуралар һөҙөмтәлелек түбәһендә ҡалырға ярҙам итә һәм шуның менән дә ҡиммәтле.

78. Мәғлүмәттең 83 проценты күҙҙәр аша алына. Нимәләр иғтибар туплар алдынан күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм шунда уҡ иғтибарығыҙҙы ситкә алып китеүсе факторҙар һанын ҡыҫҡартырһығыҙ.

79. Ихтыярығыҙҙың - хужаһы, әммә намыҫығыҙҙың ҡоло булығыҙ.

80. Үҙегеҙҙә көн һайын йөҙәү ғәҙәтен һеңдерегеҙ. Ул сәләмәтлеккә йоғонто яһай, көсөргәнештән арындыра һәм иғтибар туплауға, артыҡ ауырлыҡты кәметергә һәм үҙеңде формала торорға ярҙам итә. Йөҙәү тәндә сыныҡтыра, үпкәләргә яҡшы көсөргәнеш бирә һәм күнекмәләр өсөн бөтөнләй аҙ ваҡыт талап итә. Шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ: сыныҡҡан тәндә сәләмәт рух үҙен яҡшы тоя.

81. Бөгөн изгелек ҡылыусылар үҙҙәренең бәхетле иртәгәһен тәьмин итә.

82. Ваҡытығыҙҙы уңышлы ойоштороуҙың асҡысы - билдәләгән эшеңде ваҡытында башҡарыу. Уға барлыҡ аңығыҙҙы һәм иғтибарығыҙҙы туплағыҙ. Бары тик шундай шарттарҙа ғына барлыҡ маҡсаттарығыҙға өлгәшәсәкһегеҙ һәм үҙегеҙ өсөн мөһим булған эштәргә ваҡыт бүлә аласаҡһығыҙ. Шуға ҡарамаҫтан, һығылмалылыҡ та һаҡларға кәрәк (ныҡ тартылған кереш өҙөләүе лә мөмкин), сөнки графикты үтәү ябай дисциплинанан башҡа бер нәмә лә талап итмәй бит.

**Робин ШАРМА.**



## 11 МАРТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Торговый центр". Сериал (16+)
17.05 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Уравнение любви", 1-я и 2-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым" (18+)
01.00 Ночные новости
01.20, 03.05 "Ананасовый экспресс". Комедия (18+)
03.00 Новости
03.40 "Следствие по телу" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 " Вести-Башҡортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башҡортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башҡортостан"
14.50 "Чужие тайны. Времена года" (12+)
15.35 "Тайны института благородных девиц", 40-я серия. Сериал
16.35 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башҡортостан"
17.50 "Пилот международных авиалиний". Сериал (12+)
19.40 "Вести - Башҡортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Вероника. Беглянка", 1-4-я серии (12+)
01.15 "Большие танцы. Крупным планом"
01.30 "Девчата" (16+)
02.05 "Вести+"
02.30 "Путь войны". Боевик (16+)
04.15 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.35 " Йәштәр тауышы" (0+)
09.15 "Шиғриәт" (6+)
09.30 "Замандаштар". Эльмира Саматова (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.35 "Онотолор тимә...". Ретро (0+)
11.00 "Эдера". Нәфис фильм. 35 серия (12+)
11.45 "Илһам" милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (0+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Автограф". Тәнзилә Үлмәҫбаева (6+)
14.30 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Насип Кучаев йырлай (0+)
16.00 "Эдера". Нәфис фильм. 35 серия (повтор) (12+)
21.00 "Кис ултырып". "Ғүмерлек мөхәббәт" (2992) (0+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+)**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости**
**11.45 "Новости недели" (на русск. яз.) (16+)**
**12.15, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Волшебный курай"**
**15.15 "Царь горы" (6+)**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Бауырһаҡ"**
**16.00, 21.00 "В режиме рекордов"**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.45 "Вопрос+Ответ=Портрет"**
**18.45 Первенство России по футболу среди команд ФНЛ. "Уфа" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск)**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**23.00 "Еду я в деревню"**
**23.30 Художественный фильм (16+)**

## 12 МАРТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
